ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-29 май (һабанай) 2015

№21 (647)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Нисек дан ҡаҙанырға?



3

Килдем, күрҙем, еңдем...

Йәштәребеҙҙен үҙ алдына ошондай девизды ҡуйғаны



6

Аңлағанға - ғибрәт,

йәки тарих хаҡында фәлсәфә



8-9

Боронғо башҡорт кейемдәрен...

Ишембайға барып күрегеҙ!



11

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә "Киске Өфө" гәзитенә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Әле 2015 йылдың икенсе ярты йыллығы тураһында алдан хәстәрләп, "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһына - 539 һум 76 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) 569 һум 76 тингә яҙыла алаһығыҙ.***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Китапханаларға йөрөймө, ниндәй гәзит-журнал һәм китаптар уҡый халыҡ?

*Рәйсә КУНАЕВА, Сибай Тыуған яҡты өйрәнеү модель китапханаһы мөдире:* Быйылғы йылдың Әҙәбиәт йылы тип иғлан ителеүе, әҙәбиәтебеҙгә, яҙыусыларға, китапханаларға иғтибарҙың артыуы ҡыуандыра. Сөнки, әҙәбиәт тә, яҙыусы ла, китапхана ла кешегә хеҙмәт итә. Ниндәй генә заман булыуына ҡарамаҫтан, китаптың бәҫе юғары булып ҡала.

Хәҙерге ваҡытта матбуғатты халыҡ, элекке кеүек, бик күпләп яҙҙырып бармай. Шуға күрә беҙҙең китапханаға китап уҡырға ғына түгел, ә гәзит-журналдар уҡырға йәштәр ҙә, ололар ҙа йөрөй. Иң популяр журналдар - "Ағиҙел", "Башҡортостан ҡыҙы", "Шоңҡар", "Ватандаш", "Башҡортостан уҡытыусыһы". Ә уҡыусы балалар "Аҡбуҙат"ты, "Аманат"ты ярата. Гәзиттәргә килгәндә, " Киске Өфө", "Йәшлек", "Атайсал", "Сибайский рабочий", "Йәншишмә"не ихлас уҡыйҙар.

Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: республикабыҙҙа сыҡҡан баҫмаларҙы тулыһынса алдырып барабыҙ һәм был гәзит-журналдарҙағы материалдарҙы көндәлек эшебеҙҙә ҡулланабыҙ. Матбуғатты пропагандалап, мәғлүмәт көндәре һәм сәғәттәре, халыҡты матбуғат баҫмаларына яҙылырға өндәүсе саралар үткәреп торабыҙ. Төбәк матбуғат ветерандары китапханабыҙҙың иң йыш ҡунаҡтары.

Әлбиттә халыҡтың китапханаларға йөрөү-йөрөмәүе китапханасы эшенә лә бәйле. Замана китапханасылары - юғары белемле, киң ҡарашлы һәм шул уҡ ваҡытта бик әҙәпле һәм тыйнаҡ, электрон ресурстарҙы биш бармағылай ҡуллана белергә тейеш. Китапханасы булыу өсөн кешеләрҙе хөрмәт итеү, уртаҡ тел табыу, күңел биреп эшләү, әҙерлекле булыу кәрәк. Китапханасы ул - оҫта психолог та, яҡшы тәрбиәсе лә, нескә дипломат та. Башҡортостандың халыҡ шағиры, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рауил Бикбаев бер сығышында былай тине: "Иң бай йорт - ул бер ниндәй ҙә банк түгел, ә китапхана, сөнки унда барлыҡ кешелектең аҡыл хазинаһы тупланған..."

Компьютер заманы булһа ла, китап һис ҡасан бәҫен юғалтмай. Һуңғы ваҡытта урта һәм оло йәштәгеләр күпләп килә башланы. Бында улар гәзит уҡып, китап яҙҙырып алғандан һуң, үҙ-ара мәтур итеп аралашалар. Беҙ һәр береһе менән һөйләшәбеҙ, уларҙың уй-фекерен тыңлайбыҙ, кисәләргә саҡырып ҡалабыҙ. Шулай итеп уларға күңел йылыһы ла өләшергә тырышабыҙ. Күпселек китап уҡыусылар тарихи әҫәрҙәрҙе, ауыл тураһындағы әҙәбиәтте үҙ итә. Айырыуса үҙебеҙҙең төбәк яҙыусыларының әҫәрҙәрен яраталар. Тик шуныһы үкенесле, яңы китаптар бик оҙаҡ килеп етә.

Ҡаланың педагогия колледжы һәм БДУ-ның Сибай институты студенттары - иң әүҙем уҡыусыларыбыҙ. Китапханала үткәрелгән сараларҙа Бикташевтар ғаиләһе һәр саҡ әүҙем ҡатнаша. Рәүеф ағай менән Әминә апай үткәрелгән бөтә сараларға ла килә.

Фондыбыҙҙа балалар өсөн башҡортса китаптар бик һирәк. Балаларға матур биҙәлешле китаптар күберәк сыҡһын ине. Йәш әсәләр ҙә балаларына башҡортса, төҫлө һүрәтле китаптар һорай. Быйыл илебеҙ Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын билдәләне. Ошо датаға бәйле ҡалабыҙҙа бик күп саралар уҙҙы. Һуғыш афәты, ветерандар, Еңеү көнө тураһында шиғырҙар бик күп һоранылар. Китап уҡыусыларҙың ошо темалар буйынса яңы шиғыр йыйынтыҡтарын ҡулдарына алғыһы килә.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!*

# ОШО ЮҒАРЫЛЫҠТАН ТӨШМӘГЕҘ!

**Иң яҡын дуҫың менән күрешмәйерәк торһаң, күңелдә юҡһыныу тойғоһо барлыҡҡа килә. Уның йылы һүҙҙәрен, аҡыллы кәңәштәрен тыңлап, йәшәүгә дәрт алаһың, мәрәкәләренән көлөп, йөрәк болоҡһоуын баҫаһың, донъяуи яңылыҡтар тураһында хәбәрләшәһең, үҙеңде борсоған мәсьәләләр менән уртаҡлашып, күңелде бушатаһың. Күптән алдырған ятраҡан гәзитем - "Киске Өфө"нө лә ошондай яҡын дуҫтарым рәтенә индерәм.**

Республика халҡының рухи хазинаһына әүерелгән был баҫма тураһында тик яҡты һәм яҡшы һүҙҙәр генә әйтә алам. Тәү сиратта мәҡәләләрҙең атамаларын билдәләп үткем килә. Күҙ һалыу менән улар иғтибарҙы үҙенә йәлеп итә һәм мәҡәләне тиҙерәк уҡыу теләге тыуҙыра. Ҙур материалдың иң мөһим фекерен бер-нисә һүҙлек исем аҫтына һыйҙыра белеү оҫталығы һәр кемгә лә бирелмәй, шуға күрә гәзиттең ошо үҙенсәлеген һыҙыҡ өҫтөнә алғым килә.

**(Дауамы 2-се биттә).**



Хәйбулла ағинәйҙәре.

12+

✓ ***Шул осорға тиклем беҙҙең ата-бабалар үҙҙәренең шөғөлө менән көн күргән. Эшсән кешенең колхоз ойошторолоуға тиклем әллә күпме мал-мөлкәте булған, етеш тормошта йәшәгән.***



## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр замanda ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ӘҘЕРҘЕ ГЕНӘ...
## көтөп ултырмайыҡ

**Рәмил МӘЗИТОВ, БР Мәғарифты үҫтереү институты ректоры:** Һүҙҙе шунан башларға кәрәк: бынан етмеш йылдар самаһы элек йәшәгән кешеләрҙең тормошо менән хәҙерге үҙебеҙҙең йәшәйеште сағыштырып ҡараһаҡ, беҙгә күпкә еңелерәк икәнен берәү ҙә инҡар итмәҫ. Фән һәм техниканың үҫеүе кешеләрҙең йәшәү шарттарын шаҡтай үҙгәртте, уны күпкә яҡшыртты. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, кеше һаман да еңеллеккә ынтыла, саҡ ҡына ауырлыҡтар килеп тыуһа, артҡа ҡарай башлай. Бер аҙ көс һалып, тир түгеп, башланған эшен аҙағына тиклем еткереүселәр һирәгәйә бара.

Күптәр колхоз-совхоздарҙың бөтөүенә зарлана, ауылдарҙағы эшһеҙлектең төп сәбәбен дә шунан күрә. Ә ул колхоздар үткән быуаттың 30-сы йылдарында төҙөлөп, 90-сы йылдарҙың башына тиклем генә эшләп ҡалған дабаһа. Шул осорға тиклем беҙҙең ата-бабалар үҙҙәренең шөғөлө менән көн күргән. Эшсән кешенең колхоз ойошторолоуға тиклем әллә күпме мал-мөлкәте булған, етеш тормошта йәшәгән. Шуға күрә, бөгөн беҙ, көрсөк, эш юҡ, хөкүмәт ярҙам итмәй, тип зарланып ултырырға тейеш түгел. Урыҫтар, "күпме генә хәлүә, хәлүә тимә, унан ғына ауыҙҙа шәрбәт булып китмәй ул" ти. Тормош һәр ваҡыт көрәш майҙаны булыуын иҫебеҙҙән сығармайыҡ. Әле беҙ зарланып йәшәгән шарттарҙа ситтән килеүселәр бик тиҙ арала эш таба һалып, яраҡлашып, һин дә мин йәшәп ала ла китә бит. Тимәк, улар булдырғанды беҙ ҙә булдыра алырға тейеш.

Әлбиттә, үҙ эшеңде асып ебәреү еңел һәм тиҙ генә атҡарыла торған эш түгел, ләкин тырышлыҡ һәм түҙемлек менән тотонғанда барыһын да атҡарып сығырға мөмкин. Ауыл хужалығы өлкәһендә лә эшләнмәгән эштәр байтаҡ. Хөкүмәтте әрләп, өҫтән ярҙам көтөп ятмайыҡ, үҙебеҙ көс һалып, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыу ысулдарын табайыҡ. Әҙергә бәҙер булып ултырыуҙарҙы онотайыҡ, тип әйтмәксемен.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА**
**яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# *Китапханаларға йөрөймө, ниндәй гәзит-журнал һәм китаптар уҡый халыҡ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Фәтих МУЛЛАҒОЛОВ, хеҙмәт ветераны, Өфө ҡалаһы:*** Илебеҙҙе иң уҡый торған ил тип әйткәндәре хәтерҙә ҡалған. "Киске Өфө" биргән һорау буйынса уйланып йөрөй торғас, үҙем өсөн шуны асыҡланым һәм бик бошондом: Рәсәйҙе иң күп уҡый торған ил тип һис әйтеп булмай икән дә баһа! Ундай ил Советтар Союзы тип атала ине, ул хәҙер юҡ. Рухи хазина матди байлыҡтан өҫтөн күрелгән Советтар илендә, ысынлап та, халыҡ гәзит-журналын да уҡый, әҙәби әҫәрҙәр ҙә ярата, кино-театрҙарға ла ихлас йөрөй ине. Күптәр өйөнә кәмендә 5-6 дана матбуғат баҫмаһы яҙҙырып алдыра ине. Үҙемдән беләм: журналдар ҙа килһә, гәзиттәр почта йәшнигенә һыймай китә ине хатта. Ундай саҡтарҙа хат ташыусы йә фатирға килтереп китә, йә почтанан барып алаһың. Юғиһә, яҙылған гәзит-журналдарыңа "айыу майы" һөртөп тә ҡуялар ине эштән ҡайтыуыңа. Был күңелһеҙ күренеш булһа ла, икенсе яҡтан, ҡайһы берәүҙәрҙең кешенекен урлап булһа ла уҡырға ынтылышын үҙ елкәндә татып белеү шатландырырлыҡ та булған, тип уйлап ҡуяһың хәҙер. Кем белә, үҙе яҙылырға мөмкинлеге булмағандыр, ә уҡығы, яңылыҡ һәм донъя хәлдәрен белге килә. Әйткәндәй, уртаса эш хаҡы алғандар өсөн бер-нисә дана ваҡытлы матбуғат баҫмаһына яҙылыу бер ни тормай ине. Хәҙер генә ул бер гәзит алдырып уҡыйым, тиһәң, кәмендә мең һумыңды сығарып һалырға кәрәк. Хәҙер мәғлүмәт сараларына ҡытлыҡ юҡ, шуға ла гәзит-журналды мин күбеһенсә үҙебеҙҙең башҡорт донъяһынан айырылмайым, уны хәлемдән килгәнсе күтәрмәләшәйем, милли рухты байытайым, тип, илһөйәрлек, телһөйәрлек маҡсаттарын алға ҡуйып яҙылам. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: нисек итеп үҙебеҙҙең "Киске Өфө", "Башҡортостан" ("Йома" сығарылышын), "Йәшлек" гәзиттәрен, "Ағиҙел", "Ватандаш", "Шоңҡар", "Аҡбуҙат" журналдарын алдырмайһың инде. Улар бер көн килмәй торһа ла ҡыйын, толҡа табып булмай. Башҡа гәзит-журналдарҙы матбуғат киоскыларынан алып барырға тырышам. Үҙәк матбуғаттан "Аргументы и Факты", "Комсомольская правда"ға өҫтөнлөк бирәм. Подъездағы башҡа йәшниктәргә күҙ һала йөрөйөм: йыл әйләнәһенә өңөрәйеп буш тора улар. Түләүһеҙ таратылған реклама гәзиттәрен генә төшөрөп китәләр.

Китап уҡыуға килгәндә, хәҙер ниңәлер нәфис әҙәбиәткә тартылыу әллә ни юҡ, үҙем яратҡан авторҙарҙы һайлап ҡына уҡыйым. Күберәк тарихи, документаль әйберҙәр мауыҡтыра - йәш үҙенсәлегелер, тип уйлайым быны. Эс бошҡанда, шиғриәткә мөрәжәғәт итәм: Шәйехзада Бабич, Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим, Рәшит Назаров әҫәрҙәре нисә ҡулға алһаң да ялҡытмай. Рус әҙәбиәтенән Пушкинды яратам. Китапханаға йөрөүҙән туҡтаным. Ни өсөнмө? Бер барғанда, тип, ике-өс китап алаһың, уҡып бөткәнсе ваҡыт үтеп китә, тейешле мәленә китаптарҙы илтеп бирмәһәң... аҡса талап итәләр! Ышанаһығыҙмы, юҡмы, үҙем менән булды шундай хәл. Иң аптыратҡаны - был хаҡта иҫкәртмәгәйнеләр ҙә тәүҙә. Революцион урамы, 165-се йортта урынлашҡан 6-сы үҙәкләштерелгән ҡала китапханаһында булды был. БР Мәҙәниәт министрлығы бойороғо, тип аңлаттылар. Өҫтәүенә, һин һораған китап булмай ҙа әле ул уларҙа. Гел уҡылған иҫке әҙәбиәт, башҡорт китаптары бөтөнләй юҡ тиергә була, булғандары шулай уҡ иҫкеләр. Шулай булғас, кем йөрөһөн инде унда?

***Рәмил КИРӘЕВ, хат ташыусы, Өфө ҡалаһы:*** Өфө статистика колледжын тамамлаһам да, һөнәрем буйынса эш булмағанлыҡтан, ваҡытлыса хат ташыусы булып урынлаштым. Участка ҙур ғына булһа ла, сумкам бик ауыр түгел, шуныһы һәйбәт. Тик быныц дөйөм ҡарашҡа бер ҙә һәйбәт күренеш түгеллеген дә аңлайым. Хат ташыусының йөгө еңел икән, тимәк, халыҡ гәзит-журнал алдырмай, тигән һүҙ бит. Ҡайһы бер йорттарға бер-нисә генә дана "Вечерняя Уфа" килә, ә ветерандарға аҙнаға бер тапҡыр бушлай "Российская газета" аҙналығы һалып китәм. Башҡорт баҫмалары бөтөнләй аҙ таратыла. Гәзиттәрҙе күбеһенсә ойошмаларға ташыйым, тик барыбер улар ҙа әллә ни күпләп яҙылмай, күрәһең, аҡса экономиялайҙар. Ә бит шуның менән улар илдәге һәм донъя күләмендәге хәл-ваҡиғаларға ҡарата битарафлығын ғына түгел, үҙҙәренең сәйәси күрәшлеген дә фашлай. Сөнки бөгөн гәзит уҡымайһың икән, тимәк, донъянан бер көн артта ҡалдың, тигән һүҙ. Белеүебеҙсә, матбуғат саралары - дәүләт сәйәсәтен үткәреүсе, етәкселек менән халыҡ араһында бәйләнеш булдырыусы, йәмәғәтселек фекерен туплаусы көс булып тора. Яңылыҡтарҙы, әлбиттә, телевидение тапшырыуҙарынан да ҡарап була, ләкин гәзит - гәзит инде ул. Башҡа төрлө файҙалы һәм ҡыҙыҡлы мәҡәләләре менән дә күп мәғлүмәт бирә уҡыусыға.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

*"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!*

# ОШО ЮҒАРЫЛЫҠТАН ТӨШМӘГЕҘ!

**(Башы 1-се биттә).**

Баҫмала донъя күргән һәр мәҡәлә актуаллеге һәм бөгөнгө көндә өҫтөнлөклө урында булған темаларҙы күтәреүе менән дә күңелде арбай. Уның биттәрендә баш ҡалабыҙға ҡағылышлы төрлө һәм бай мәғлүмәттәр бирелеүе менән бергә, республика, ил, донъя кимәлендәге хәбәрҙәр ҙә урын ала. Был мөһим аспект, сөнки үҙ күсәреңдә генә өйрөлмәйенсә, донъялағы башҡа халыҡтар һәм уларҙың көнитмеше тураһында хәбәрҙар булып тороу төрлө аңлашылмаған хәлдәрҙән азат итә.

Гәзиттең тышҡы йөҙө лә, эстәлеге лә сифатлы һәм күркәм. Мәҡәләләрҙең ирекле стилдә яҙылыуы, ләкин шул уҡ ваҡытта йөҙәткес булмауы уларҙы уҡымлы итә. Ҡайһы бер баҫмаларҙағы мәҡәләләрҙе уҡый башлайһың да, уның буталсыҡ булыуынан, кәрәкмәгән күпһүҙлелектән арып, аҙағына тиклем барып етмәйһең. Ә "Киске Өфө"лә бирелгән ниндәй ҙә булһа мәҡәләне уҡып бөтмәүемде иҫләмәйем, киреһенсә, күптәрен ҡайта-ҡайта уҡыйым. Ғөмүмән алғанда, бар яҡтан да тик хуплау һүҙҙәренә лайыҡ гәзит ул - "Киске Өфө". Артабан да ошо юғарылыҡтан төшмәүен, уҡыусылары араһында яулап алған оло баһаһын юғалтмауын, ижад ҡомарының һүнмәүен теләйем абруйлы баҫмабыҙға. Халҡыбыҙ, илебеҙ, телебеҙ мәнфәғәтен тәүге урынға ҡуйған һәм уларҙан көс, таяныс һәм һүҙ көсө алған гәзитебеҙгә алда тик уңыштар ғына юлдаш булһын.

**Зифа ҒИЛМАНОВА.**
**Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Рәсәй тимер юлдары" йәмғиәтенең филиалы - Куйбышев тимер юлы начальнигы Сергей Соложенкин менән осрашты. Улар Өфө тимер юлының ШОС һәм БРИКС саммиттарын үткәреүгә әҙерлек барышын, шулай уҡ ҡала яңы маршруттарында пассажирҙар ташыуҙы ойоштороу мәсьәләләрен тикшерҙе.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, ШОС һәм БРИКС халыҡ-ара саммиттарына әҙерлек тулы ҡеүәтендә бара, был маҡсатта 10,5 млрд һум аҡса тотонолған да инде. Өфө аэропорты модернизацияланды, төп саралар үтәсәк Конгресс-холда ултырыштар өсөн махсус урындар булдырылды. Ике йыл эсендә шәхси инвесторҙар Өфөлә 7 яңы ҡунаҡхана төҙөнө. "Саммиттар мәлендә хәрәкәт итеүҙә бер ниндәй ҙә сикләүҙәр булмаясаҡ, берҙән-бер Салауат Юлаев майҙаны ябыҡ буласаҡ, унда журналистар өсөн үҙәк эшләйәсәк", - тине Рөстәм Хәмитов.

✓Башҡортостанда яҡын арала Шаҡшанан Шишмәгә тиклем йөрөгән электричка барлыҡҡа килеүе ихтимал. Әлеге мәлдә бер төркөм белгестәр уның туҡталыштары һәм яңы платформаларын булдырыу өҫтөндә эшләй. Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Куйбышев тимер юлы начальнигы Сергей Соложенкин менән осрашыу мәлендә билдәләүенсә, республикала ҡала яңы поездары һәм электричкалары эше ҡәнәғәтләнерлек, әммә күптәр яңы маршруттар булдырыуҙы ла һорай.

✓Өфөлә 9-10 июлдә үткән БРИКС саммиты эшен дауам итеп, баш ҡалала Рәсәй, Көньяҡ Африка Республикаһы, Һиндостан, Ҡытай Халыҡ Республикаһы һәм Бразилияның элемтә һәм киң коммуникациялар министрҙары осрашыуы үтәсәк. Был ҡарар яңыраҡ Кейптаунда Рәсәй элемтә һәм киң коммуникациялар министры Николай Никифоровтың Көньяҡ Африка Республикаһының элемтә министры Файт Мутамби һәм телекоммуникациялар һәм почта элемтәһе министры Сиабонги Квеле менән осрашыуында ҡабул ителде.

✓Ҡаҙағстандың Аҡтау ҡалаһында башҡорт һабантуйы уҙҙы. Уны "Салауат" башҡорт мәҙәни үҙәге ойошторҙо. Һабантуйҙа милли уйындар, милли спорт төрҙәре буйынса ярыштар үтте. Байрамда башҡорт артистары ла ҡатнашты. Башҡорт этномәҙәни берекмәһенең әүҙем ағзаларына БР Мәҙәниәт министрлығының маҡтау ҡағыҙҙары тапшырылды. Бынан тыш, башҡорт мәҙәни үҙәгенә ике милли костюм һәм сувенир һауыт-һаба бүләк ителде.

**✓ Ҡәүемебеҙҙең төрлө яҡтарға таратылған "ярсыҡтарын" беҙ ҡасан бергә йыйырбыҙ икән, тигән фекер барлыҡҡа килде. Ысынлап та, һәр беребеҙ кескәй генә ҡояш ярсығы йылыһында үҙ өңөбеҙҙә-өйөбеҙҙә ултырабыҙ түгелме беҙ?**



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

**Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арнап, Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙанында ойошторолған хәрби парад һәм Рәсәй халҡының илебеҙ ҡалалары урамдарынан тығыҙ сафтар булып үткән "Үлемһеҙ полк" маршы кешелек хәтере гендарының ныҡлығына дәлил булып ҡына ҡалманы, бәлки, халҡыбыҙҙың аң, выждан һәм намыҫ дәрәжәһен күрһәтеүсе һәм күтәреүсе ҡеүәтле бер көс булараҡ та сикһеҙ һоҡланыу һәм ғорурлыҡ уятты. "Ошондай илде, ошондай халыҡты еңеп булмаясаҡ, юҡ!" тип ҡабатлайым Александровтың арҡаларҙы сымырҙатып яңғыраған "Изге яу"көйөнән гәйрәтләнеп...**



# НИСЕК ДАН ҠАҘАНЫРҒА?

Һәм бына музыка тынды, парад тамам, салют атылды, кешеләр өйҙәренә таралышты. Иманым камил: күп йорттар түрендә был кис тостар әйтелде, шешәләр бушатылды. Анларға ла була, бер яҡтан, ут эсенә ингән, тиңһеҙ алышта баштарын һалған исемле һәм исемһеҙ шәһиттәр, геройҙар өсөн, тинеләр бит. Икенсе яҡтан, аңлашылмаған, хәүефләндергәне шул: яу тынмаған әле, дошман уяу. Беҙ уға ҡаршы һуғышмайбыҙ, сөнки ул - арабыҙҙа, беҙҙең менән бергә донъя көтөп, һәүетемсә йәшәп ята: наркотик, араҡы, коррупция, енәйәт, эшһеҙлек, маңҡортлоҡ, рухһыҙлыҡ... Миллионлап ил байлығын урлаусы юғары чиновник - бына заманыбыҙ геройы. Әшсе йә игенсе түгел, ә намыҫһыҙ чиновниктар, эреле-ваҡлы уғрылар, ришүәтселәр. Уларҙың йәшәү рәүеше, иләмһеҙ ҡылыҡ-фиғеле тураһында көн дә зәңгәр экрандарҙан репортаждар күрһәтелә, портреттары гәзит биттәрен "биҙәй", интернет киңлектәрен айҡай - ҡыҫҡаһы, бынамын тигән "геройҙар" инде! Етмәһә, асыуға тейеп, әлеге бурҙарҙың хан һарайылай зиннәтле виллаларын, тиҫтәләгән бүлмәле әкиәти фатирҙарын, алтындан эшләнгән (гәфү итегеҙ) бәҙрәфтәрен, миллион-миллион һумлыҡ ручкаһынан алып, башҡа төр йыһаздарын тәмләп-тәсфилләп күрһәтәләр, шуның менән ҡиммәтле эфир ваҡытын әрәм-шәрәмләйҙәр. Ә бына ошондай бурҙарҙың енәйәте арҡаһында бюджет тоғонда барлыҡҡа килгән тишектәрҙе ямау һаман булһа ябай халыҡ елкәһенә төшә. Әлбиттә, бурҙарҙың барыһын да тотоп бөтөү ҙә мөмкин түгелдер , сөнки бәләкәй генә власть башында ултырғандар ҙа нисек булһа ла иң тәүҙә үҙ кеҫәһен ҡайғырта. Ә бит ҡомһоҙлого һәм оятһыҙлығы менән даны хатта сит илдәргә таралған чиновниктарҙың урлағанын кире ҡайтарып, законһыҙ милектәрен конфискациялау ғына ла байтаҡ файҙа килтерер ине беҙҙең мәңге яшыҡ бюджетҡа. Юҡ, ниңә улай эште ҙурға ебәрергә? Ташландыҡ фермаларҙың һуңғы ишек-тәҙрәһенә тиклем урланып-таланып бөттө лә, илдә "һауын һыйырҙар" бөтмәгән әле. Был хаҡта үткәндә генә РФ финанс министры А. Силуанов үҙе: "Эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың килеме етерлек булғандарға пенсияларының бер өлөшөн түләмәгәндә лә булыр ине",- тип белдерҙе көндәрҙең береһендә, ахырҙа, аптырағас (АиФ, №20, 2015). Яҡшы, ул осраҡта әле дары-дарманы бар пенсионерҙар ҙа эшһеҙ ятыуҙы хуп күрәсәк - ә кем эшләр һуң? Байҙар - байый, уларҙа бер кемдең дә эше юҡ, ә ярлыны һаман булһа баштүбән тотоп һелкеткеләйҙәр - һуҡыр тине килеп төшмәсме тишек кеҫәһенән...

Ә был һуңғы тиндәрҙе һауыусылар былай ҙа етерлек тормошобоҙҙа: әле бына 1 июлдән коммуналь хеҙмәттәр өсөн тарифтарҙың тағы ла кәмендә 10 процентҡа артыуы көтөлә. Әйткәндәй, был йәһәттән йылдың-йылы һәр төрлө "яңылыҡтар" уйлап сығарып ҡына торалар: халыҡтың былай ҙа таҡыр кеҫәһен нисек тә күберәк һығырға! Капремонт өсөн түләтеү башланып өлгөрмәне, электр энергияһына айырым иҫәп килә башланы. Квитанция ҡағыҙына ошоға тиклем түләтелгән сумманан ике тапҡырға артыҡ түнәрәк кенә һандар һуғылған. Былай ҙа ҡаңғырған баштарҙы бутап, тотонолған энергияны иҫәпләүҙән буталсыҡ арифметикаһы ла уйлап сығарылған хатта. ОДН (дөйөм йорт ихтыяждары) өсөн сығымдарҙы ҡаплау ҙа икеләтә түләү булып төштө әлеге ҡулланыусы кеҫәһенә. Квитанцияларҙағы һандарҙың дөрөҫлөгөн тикшереүсе юҡ, сөнки ябай халыҡ белә: уның осона сығып булмаясаҡ. Ә инде магазиндағы хаҡтарҙы күреп, күп нәмәнән баш тартырға, үзенде сикләргә тура килә хәҙер. Мәҫәлән, пенсионерҙың төп ризығын тәшкил иткән икмәк-һөт, ярма, сәй-шәкәргә генә лә хаҡтар күпмегә барып етте һуңғы айҙарҙа. Сәйгә, әйтәйек, хаҡтарҙың йыл башынан 10-20 процентҡа артыуы күҙалланһа ла, ул ҡайһы бер сауҙа нөктәләрендә 40-100 процентҡа тиклем барып етте. Йәй үлән-мүлән йыйып, киптереп, сәйҙе үҙебеҙгә хәстәрләргә тура килмәгәйе. Бушлай ҙа, файҙалы ла булыр. Юғиһә, сит илдәрҙән килтерелгән сеймал булараҡ, сәйҙең хаҡы доллар курсына бәйле булыуы билдәле, тик бында уны һатыусыларҙың "болғансыҡ һыуҙа балыҡ эләктереп ҡалыу" интылышын күрмәү ҙә мөмкин түгел: сауҙа ойошмалары аҙыҡ-түлек һәм башҡа тауарҙарға хаҡтарҙы үҙҙәре теләгәнсә арттыра ала. Бына шунан хасил була ла инде баяғы уғрылыҡ тигәнең. Әлегеләй, бында ла кеше кеҫәһенә инеүҙең хәйләле механизмдары эшкә ҡушылған, ә тикшереүсе юҡ.

Ҡыҫҡаһы, ҡайҙа ҡарама - контролһеҙлек, битарафлыҡ, хуш күңеллелек, сөнки күп нәмә баштан башлана. Ил ҡеүәте башында торop, уның хәүефһеҙлеген тәьмин итергә тейешле Сердюков тигән әҙәмдең баш етмәҫлек енәйәттәргә юл ҡуйыуына күҙ йомоп, башынан һыйпауҙан аҙаҡ түгелме тугелме ҡолас етмәҫ уғрылыҡ афәте илдә? Ә уның һөйәркәһе Васильева ниндәй популяр героиняға әйләнде! Һәр аҙымын яҡтыртып, һәр һүҙен яҙып алып, ауыҙына ғына ҡарап торалар бит. Хатта СИЗО-ла ултырһа ла. Әле бына уға йә тырнаҡ игәүе, йә йомшаҡ матрас кәрәклеген кемуҙҙарҙан хәбәр итәләр. Был ни булды әле? Быуаттар алмашынып, идеалдар аҙашыуымы юғиһә, әллә пиар тигән ағулы сәскә емештәреме был? Ә ҡайҙа бөгөнгө көнөбөҙҙөң ысын геройҙары - илһөйәрҙәр? Ҡайҙа әлеге Ҡыҙыл майҙанда Рәсәй һәм Еңеү флагтарын ғорур тотоп, "Изге яу" маршы аҫтында парадты башлап ебәреүсе егеттәр? Анау тиклем хәрби техниканы эйәрләгән айбарлы батырҙарыбыҙ ҡайҙа? Һәм, ғөмүмән, кемдәр, ҡайҙан улар? Уларҙы тәрбиәләп, ир еткергән атаәсәләре кемдәр? Бер кем бер ни белмәй. Ә атаҡлы бурҙарҙы йәҙгә генә түгел, ни ҡыланғанын, ни әйткәненә тиклем белеп-күреп торабыҙ. Шунан, уйлап ҡараһаң, дан ҡаҙаныу, билдәлелек яулау өсөн йәш быуын ниндәй юлды һайларға тейеш буласаҡ?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*



# ҠОЯШ ЯРСЫҠТАРЫН БЕРГӘ ЙЫЙҺАҠ...

**Яҙыусы Максим Горькийҙан: "Балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәр ниндәйерәк булырға тейеш?"- тип һорағандар. Ул: "Ололар өсөн яҙылғандары һымаҡ, тик тағы ла яҡшыраҡ булырға тейеш", - тип яуап биргән.**

Совет йылдарында яҙыусыларҙың, ысынлап та, балалар өсөн ололарға тәғәйенләнгәндән дә яҡшыраҡ әҫәрҙәр ижад иткәнен беләбеҙ. Быға, бәлки, көслө цензура аша үткәреү ҙә булышлыҡ иткәндер. Ул йылдарҙа С. Михалков, А. Гайдар һымаҡ классиктар киң билдәлелек яуланы. Әлбиттә, бөгөн дә исемдәре бөтөн илгә билдәле балалар яҙыусылары барҙыр, тик мин уларҙы белмәйем. Әле хатта йәнһүрәттәрҙе лә ҡарарлыҡ түгел. Әкиәттәрҙе лә боҙоп, үҙгәртеп төшөрәләр. Бик һирәктәре генә балаларға ғына түгел, ә ололарға ла фәһем бирерлек.

Шундай бер йәнһүрәтте әле күптән түгел һоҡланып ҡараным. Уның нисек аталғанын уҡып өлгөрмәнем, шуныһы йәл. Ҡурсаҡтар (анимация) ярҙамында төшөрөлгән был йәнһүрәт тураһында һеҙгә лә һөйләп үтәйем әле. Бер кескәй генә ҡуян тау башына менеп ултырып алған да, күбәләк тоткос менән бәләкәй болоттарҙы эләктерә лә, тәмләп ҡарай. Береһен тәмләп ҡарай ҙа, "еләк тәме килә", ти, икенсеһенән "алма тәме килә", ти ҙә, осороп ебәрә. Шулай уйнап ултырғанында яңылыш ҡояшты эләктереп ала ла, шатланып, тәгәрәтеп, тауҙан түбән төшөп барһа, төлкө балаһын осратып, уға ҡояш ярсығын бүләк итеп биреп китә. Кемде осрата - шуға ҡояш ярсығынан өлөшөн сығара был. Балыҡ тотоп ултырған айыу балаһы ҡуян балаһы биргән ҡояш ярсығын тәмләп ҡарай ҙа: "Бер тәме лә юҡ", - тип, ярсыҡ күлгә ырғытыуы була, Ер йөҙөн ҡараңғылыҡ ҡаплай. Өкө генә: "Мәңгелек төн минә бик ярап ҡалды бит әле", - тип ҡыуанып. Ә башҡа йәнлектәр, үҙҙәренең ҡояш ярсығы яҡтыһына, йылыһына ғына һыйынып, өңдәренән ҡараңғылыҡҡа сығырға ҡурҡып тик ултыра, ти. Шул саҡ йомарт ҡуян балаһы: "Бәлки, беҙгә ҡояш ярсыҡтарын янынан бергә йыйырғалыр?"- тигән һорау ҡуя. Йәнлектәр йүгерешеп йөрөп ҡояш ярсыҡтарын бергә йыя, әммә ул китек булғас, күккә күтәрелә алмай. Шул саҡ айыу балаһы күл төбөндәге ҡояш ярсығын иҫәнә төшөрөп, күлгә сума, уны сығарып, беркетеүе була, ҡояш балҡып, нурын сәсеп, күккә күтәрелеп тә китә. Барыһы ла ҡыуаныша...

Ошо йәнһүрәтте ҡарағас, башыма: "Ниндәй оло аҡыл йәшерелгән был йәнһүрәткә..." - тигән уй килде. Шәхсән үҙем был әҫәр беҙҙең башҡорт иленең тарихын, ысынбарлығын һөйләй, тип ҡабул иттем. Ҡәүемебеҙҙең төрлө яҡтарға таратылған "ярсыҡтарын" беҙ ҡасан бергә йыйырбыҙ икән, тигән фекер барлыҡҡа килде. Ысынлап та, һәр беребеҙ кескәй генә ҡояш ярсығы яҡтыһында, йылыһында үҙ өңөбөҙҙә-өйөбөҙҙә ултырабыҙ түгелме беҙ?

**Айгөл АХУНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда урман янғындарына ҡаршы махсус режим иғлан ителде. Уға ярашлы, республикала янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү көсәйтелгән, бөтөн янғын һүндереү бүлектәрендә тәүлек әйләнәһенә дежур итеү ойошторолa, халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барыла. Һуңғы осорҙа Башҡортостанда теркәлгән янғындарҙың туғыҙы - хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәмәүҙән, икеүһе йәшендән сыҡҡан, береһенең сәбәптәре асыҡланмаған. Уттан зыян күргән майҙандың күләме - 50,7 гектар.

✓Өфөлә Hampton by Hilton отеле асыласаҡ. Ул Октябрҙең 50 йыллығы исемендәге урамында урынлашҡан. Һигеҙ ҡатлы ҡунаҡхана 161 номер, уларҙың икеүһе сәләмәтлеге сикләнгән кешеләр өсөн тәғәйенләнгән. Отель Economy+ класына ҡарай һәм "дүрт йондоҙ" талаптарына тура килә. Башҡорт орнаменты төшөрөлгән бизәлеше ... стена отелгә милли үҙенсәлек өҫтәй.

✓Режиссер Булат Йосоповтоң "Визит" фильмы Севастополдә үткән "Золотой витязь" XXIV халыҡ-ара кинофорумында ҡатнаша. "Визит" фильмында 1978 йылда Башҡорт АССР-ында булған ваҡиға һүрәтләнә - Иордания королеваһы Дина Абдель Хамид Өфөлә Рудольф Нуриевтың әсәһе менән осраша. Кинофорумда 170 картина ҡатнаша, уның рәйесе - РФ Кинематографистар союзы рәйесе, Рәсәйҙең халыҡ артисы Никита Михалков.

✓1 июлдән "Рәсәй-Мәҙәниәт" телеканалында төбәк тапшырыуҙары башлана. Көн һайын ярты сәғәтлек "Иртә" тапшырыуында ҡунаҡтар менән әңгәмә, баш ҡалала һәм республикала барған иң сағыу ваҡиғалар хаҡында яңылыҡтар буласаҡ. Шулай уҡ яңы ҡыҙыҡлы рубрикалар асырға ниәтләйҙәр. Команданың слоганы - "Беҙ һәр ваҡыт мәҙәниәт менән бергә". 15 майҙан "Рәсәй 24 Башҡортостан" каналында республикалағы ваҡиғалар һәм мәҙәниәт тормошо тураһында яңылыҡтар эфирға сыҡты. 22 майҙан "Рәсәй" каналында башҡорт йырсыларының "Гөлсәр һандуғас" музыкаль конкурс-фестивале башланды.

✓Өфөлә Нефть химияһы аҙнаһы үтте. Был күргәҙмәлә 35 Рәсәй төбәгенән һәм 12 сит илдән нефть һәм газ өлкәһендә эшләгән 400-ҙән ашыу компания ҡатнашты. Рәсми саранан һуң республика Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡатнашыусылар менән аралашты. Күргәҙмә сиктәрендә конференциялар, түңәрәк өҫтәлдәр, презентациялар ойошторолдо. Республикалағы нефть химияһы аҙнаһын "Ҙур химия" V халыҡ-ара форумы дауам итте.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫНАН...

**13 майҙан Башҡортостандағы дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр күрһәтеү буйынса күп функциялы үҙәктең бөтә бүлектәрендә әсәлек капиталының 20 мең һумын алырға ғаризалар ҡабул ителә. Был хаҡта күп функциялы үҙәктең матбуғат хеҙмәте хәбәр итә.**

Бер тапҡыр бирелә торған әлеге аҡса 2015 йылдың аҙағына ҡәҙәр сертификатлы булған һәр ғаиләгә бирелә. Ғаризаны 2016 йылдың 31 мартына тиклем тапшырырға кәрәк. Ғаризалар сертификат эйәләренән йәки уларҙың законлы вәкилдәренән ҡабул ителә.

Әсәлек капиталынан бер тапҡыр бирелә торған түләү 2015 йылдың 20 апрелендәге "Әсәлек капиталы иҫәбенә бер тапҡыр бирелә торған түләү тураһында" 88-се Федераль законға ярашлы тормошҡа ашырыла.

## КӘМЕЙБЕҘ...

**Ғинуар-мартта республикала халыҡ һаны 3 572 кешегә кәмегән, тип хәбәр итә Башҡортостанстат. Йыл башында теркәлгән тәбиғи һәм миграция иҫәбенә кәмеү дауам иткән.**

Өс айҙа төбәктә 14 047 сабый донъяға килгән - былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда 2,9 процентҡа кәмерәк. Үлеүселәр һаны, киреһенсә, 8,2 процентҡа артҡан һәм 14 148 кеше тәшкил иткән. Шулай итеп, тәбиғи кәмеү - 101 кеше.

Дөйөм алғанда, беренсе кварталда Рәсәйҙең 28 субъектында, шул иҫәптән Волга буйы федераль округының ике төбәгендә - Татарстанда (плюс 1288 кеше) һәм Удмурт Республикаһында (плюс 145 кеше) ғына тәбиғи үҫеш күҙәтелгән. Рәсәйҙә тәбиғи кәмеү артҡан. Былтыр тәүге кварталда Рәсәй халҡы - 25,2 мең, 2015 йылдың ғинуар-март айҙарында 52,4 мең кешегә кәмегән.

Башҡортостанда миграция сальдоһы - кире. 13,1 мең кеше республиканан ситкә киткән, 9,7 мең кеше Башҡортостанды даими йәшәү урыны итеп һайлаған. Миграция иҫәбенә кәмеү - 3 471 кеше.

## БАҘАР ХАҠЫ ШУЛАЙ!

**Республиканың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты бойороғо менән Башҡортостанда 2015 йылдың икенсе кварталына дөйөм торлаҡ майҙанының бер квадрат метрына уртаса баҙар хаҡы күрһәткестәре раҫланды.**

Өфөлә торлаҡтың һәр квадрат метрының баҙар хаҡы 33 771 һум тәшкил итә. Нефтекамала һәм Октябрьскийҙа - 33 500 һум, Салауатта - 32 000, Күмертауҙа - 31 200, Сибайҙа - 31 000, Ағиҙелдә - 28 000, Межгорьела - 23 600. Ҡала биләмәләре өсөн раҫланған күрһәткес - 29 000 һумдан (Дәүләкән) 33 100 һумға тиклем (Туймазы). Муниципаль районлдарҙа - (Баймаҡ, Белорет, Бөрө, Благовещен, Дәүләкән, Дүртөйлө, Ишембай, Мәләүез, Учалы һәм Яңауыл райондары) 25 600-ҙән алып 33 500-гә тиклем (Өфө районы).

Дәүләт төҙөлөшө тарафынан раҫланған күрһәткестәр торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж граждандар өсөн торлаҡ төҙөү йәки һатып алыуға субсидиялар күләмен иҫәпләгәндә файҙаланыла, тип асыҡлыҡ индерелә.

ФЕКЕР ҠОРО

# ӘЛЕГӘ ХӘҮЕФ ЮҠ

## артабан да шулай булырмы?



**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте ҡарамағындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр мәсьәләләре буйынса комиссияның беренсе ултырышы үтте. Тәү тапҡыр уҙғарылғанлыҡтан, сара төп иғтибар үҙәгендә булырға тейешле мәлдәрҙе үҙ эсенә алды.**

- Донъяла барған ваҡиғалар фонында милләт-ара татыулыҡ көнүҙәк һәм мөһим мәсьәләгә әүерелә бара. Әгәр әлегә был өлкәлә бер ниндәй ҙә хәүеф тоймайбыҙ икән, һәр саҡ шулай булыр, тип тынысланырға ярамай. Дәүләт Советының милләт-ара татыулыҡты нығытыу буйынса уҙғарылған ултырышында РФ Хөкүмәте Рәйесе Д. Медведев был өлкәләге солох, татыулыҡты һаҡлауҙы өҫтөнлөклө мәсьәлә итеп ҡуйҙы. Киләсәктә кире эҙемтәләр булмаһын өсөн бөгөн милләт-ара татыулыҡты һаҡларға һәм иҫҡәртеү эштәре алып барырға кәрәк, - тип белдерҙе үҙенең сығышында Комиссия рәйесе, ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов һәм ошо йөһәттән баш ҡалала башҡарылған эштәргә туҡталып үтте.

Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәтенең Ижтимағи-сәйәси үҫеш буйынса идаралыҡ начальнигы урынбаҫары - милли сәйәсәтте тормошҡа ашырыу бүлеге мөдире Ришат Сабитовтың сығышы башында уҡ Өфөгә ҙур өмөттәр бағлауы һәм ҙур яуаплылыҡ йөкмәтеүе лә юҡҡа түгел. Сөнки Өфө - республиканың баш ҡалаһы, тап бында барлыҡ ижтимағи-милли ойошмалар тупланған, тап бында республика кимәлендә генә түгел, федераль кимәлдә милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса мөһим ҡарарҙар ҡабул ителә. Шуға күрә, тап Өфө муниципаль органдар алдына ошо өлкәлә күтәрелгән мәсьәләләр буйынса өлгө булып торорға тейеш.

- Беҙ милләт-ара мөнәсәбәттәргә ҡағылышлы төбәк норматив актарына, ғәмәлдәге программаларына һәм эш пландарына тулыһынса анализ үткәреп, уларҙы яңы бурыстарға һәм йүнәлештәргә тап килтерҙек, - тине Ришат Хажғәле улы, республикала дәүләт милли сәйәсәте стратегияһын тормошҡа ашырыуҙың төп йүнәлештәре менән таныштырған сығышында. - "2014-2020 йылдарға Рәсәй милләте берлеген нығытыу һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының этномәҙәни үҫеше" тип аталған программа раҫланды. Шулай уҡ 2016 йылға тиклем БР халыҡтары телдәрен һаҡлау, өйрәнеү, үҫтереү буйынса "Рәсәй Федерацияһы башҡорттары", 2013-2015 йылдарға РБ социаль йүнәлешле коммерция булмаған ойошмаларына ярҙам итеү программалары тормошҡа ашырыла. Милли-мәҙәни берләшмәләргә льготалы шарттарҙа йәки бушлай файҙаланыу шарттарында күсемһеҙ милек ҡуртымға бирелә, эшмәкәрлектәре гранттар менән хуплана. Йыл һайын ижтимағи ойошмалар араһында субсидия алыуға конкурс уҙғарыла. Конкурс һөҙөмтәһендә былтыр республика бюджетынан 10 миллион һум бүленһә, быйыл республика федераль конкурста еңеп, милләт-ара мөнәсәбәттәр өлкәһендәге программаларҙы тормошҡа ашырыуға 30 миллион һумдан ашыу аҡса аласаҡ. Быйыл республика Башлығы "Республикала дәүләт милли сәйәсәтен тормошҡа ашырыу буйынса өҫтәмә саралар тураһында" Указға ҡул ҡуйҙы. Уға ярашлы, "2014-2020 йылдарға Рәсәй милләте берлеген нығытыу һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының этномәҙәни үҫеше" программаһы буйынса айырым дәүләт программаһы әҙерләнәсәк. Был дәүләт милли сәйәсәтен тормошҡа ашырыу буйынса республиканың этнопрограммалары ҡеүәтен берләштереү мөмкинлеген бирәсәк.

Шулай уҡ телмәрендә Ришат Сабитов йыл башынан федераль мониторинг системаһы эшләй башлауын һәм унда барлыҡ муниципаль берәмектәр ҙә ҡатнашасағын белдерҙе. Әлеге ваҡытта Гуманитар тикшеренеүҙәр үҙәген булдырыу буйынса эш алып барыла, ул милләт-ара һәм конфессия-ара мөнәсәбәттәр торошона мониторинг эшләү менән шөғөлләнәсәк. Тикшеренеүҙәр асыҡлауынса, респонденттарҙың 82,3 проценты республикала милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе тыныс тип билдәләй. 89 проценты үҙҙәрен башҡа милләт вәкилдәренә ҡарата түҙемле тип иҫәпләй. Күп милләтле һәм миграция ағымы көслө булған республика өсөн был да үҙенә күрә тотороҡло күрһәткес.

Өфө ҡалаһы прокуроры Владлен Михайленко милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе бик ҡатмарлы һәм күп ҡырлы мәсьәлә тип баһалап, уны лакмус ҡағыҙы менән сағыштырҙы. Сөнки граждандар йәмғиәтенең торошон тап ул асыҡ сағылдыра. Артабан хоҡуҡ органы вәкиле Рәсәй Федерацияһында милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе нығытыуға йүнәлтелгән ҡануниәт базаһы менән таныштырып үтте. Уға ярашлы, ил субъекттарының юғары башҡарма власының төп вәкәләте булып мигранттарҙың социаль һәм мәҙәни адаптацияһын тормошҡа ашырыу, милләт-ара, этник-ара низағтарҙы иҫкәртеү, милләт-ара һәм конфессия-ара татыулыҡ тәьмин итеү тора. Был бурыстар миниципаль берәмектәр кимәлендә лә үтәлергә тейеш. Владлен Владимирович милләт-ара низағтарҙың нигеҙендә тәү ҡарашҡа түҙмәүсәнлек ятҡан кеүек булһа ла, мәсьәләне тәрәндән анализлағанда, уның сәбәбе - иҡтисади һәм социаль характерҙағы мәсьәләләрҙең оҙайлы ваҡыт хәл ителмәүе, тип белдерҙе. Рухһыҙлыҡ, ҡануниәтте һанға һуҡмаған миграция процестары, экстремистик элементтарҙың әүҙемлеге бер ҙә юҡтан килеп тыумай, был - халыҡтың урындағы үҙидаралыҡҡа һәм чиновниктарға ышанмаусылығы сағылышы. Бик йыш чиновниктар аппаратының "йәнһеҙлеге" кешеләрҙе төрлө төркөмдәргә инергә этәрә - унда уларҙы "тыңлайҙар, аңлайҙар, ярҙам итергә әҙер торалар". Быңдай күренештәр шулай уҡ төбәктең идара итеүсе власть органдарының һәм контроллек итеүсе хоҡуҡ һаҡлау органдарының эшләп еткермәүе һөҙөмтәһе.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2014 йылдағы "Иң яҡшы күп фатирлы йорт" конкурсы йомғаҡтары буйынса Өфөләге 13 йорт ҡалала иң яҡшылары тип танылды. Конкурс йомғаҡтары буйынса республикала 50 иң яҡшы күп фатирлы йорттар билдәләнде. Еңеүселәр Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығының дипломдары һәм 100 мең һум күләмендә аҡсалата премиялар менән бүләкләнәсәк. Был аҡсаны күп фатирлы йортто һәм йортҡа ҡараған биләмәне төҙөк хәлдә тотоуға йүнәлтергә, премияның 10 процентҡа тиклемге өлөшөн күп фатирлы йорт советы рәйесенә йәки торлаҡ милексәләре ширҡәте рәйесенә премия итеп бирергә мөмкин.

✓21 майҙа Өфөлә "Ҙур химия" V халыҡ-ара форумы асылды. Форум Башҡортостандағы Нефть химияһы аҙналығы сараларының береһе булып тора. Ике көнлөк форум һәм "Газ. Нефть. Технологиялар" күргәҙмәһе республиканың баш ҡалаһында Рәсәйҙең 2014-2015 йылдарҙа Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһында һәм 2015 йылда БРИКС берекмәһендә рәйеслеге сиктәрендә уҙа. Форум эшендә 600-ҙән ашыу делегат, шул иҫәптән Иран, Афғанстан, Ҡытай, Һиндостан, Германия, Бөйөк Британия, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Белоруссия һәм Венесуэла вәкилдәре ҡатнаша.

✓25 майҙа "Родина" кинотеатрында "Башҡортостан" киностудияһы ойошторолоуына 25 йыл тулыуға арналған Кино аҙналығы башлана. 25 майҙа Айнур Аҫҡаровтың "Еңмеш" лирик комедияһы, Роман Пожидаевтың "Карусель" һәм "Япраҡ", Таңсулпан Бураҡаеваның "Өйләнәм" һәм Булат Йософовтың "Визит" фильмдары күрһәтелә. Тамашасылар 26 майҙа Вилүрә Иҫәндәүләтованың "Мөрйәләрҙән төтөн сыға әле..." фильмын, 27 майҙа Айсыуаҡ Йомағоловтың "Ел ҡыуысы" комедияһы, 28-дә Булат Йософовтың "13-сө раунд" мелодрамаһын ҡарай ала.

✓Өфө уҡыусылары өсөн өлгөргәнлек аттестаты тапшырыу һәм сығарылыш кисәләре 26 июндә үтәсәк. Баш ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығынан белдереүҙәренсә, был кисәләрҙең башлыса мәктәптәрҙә ойошторолоуы хупланасаҡ. Быйыл мәктәптәрҙең 70 проценты ошо ҡағиҙәгә буйһонасаҡ, 40 мәғариф учреждениеһы ғына сығарылыш кисәләрен кафе һәм рестарандарҙа үткәрергә ҡарар иткән. Ә уға тиклем, 23 майҙа, мәктәптәрҙә һуңғы ҡыңғырауҙар яңғырасаҡ, шул көндә уҡ баш ҡала халҡы сығарылыш уҡыусыларының "Яҙғы бал" тамашаһына шаһит була аласаҡ.

- Хоҡуки акттар, төбәк, муниципаль программалар ҡабул ителеүгә ҡарамаҫтан, уларҙың йөкмәткеһе һәм финанслау проблеманың күләменә тап килмәй, - тип йомғаҡланы һүҙен Владлен Михайленко. - Ҡағыҙә булараҡ, үкенескә күрә, бындай эшмәкәрлек формаль характерҙа әйә, ә саралар ҙың бер өлөшө былай ҙа тейешле органдарҙың көндәлек эше булып тора. Бында системалылыҡ булырға тейеш. Бер тапҡыр ғына үткәрелгән саралар бер ниндәй һөҙөмтә бирмәйәсәк.

Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһының ғилми хеҙмәткәре, сәйәсәт фәндәре кандидаты Владимир Савичев сит илдәрҙең милләт-ара мөнәсәбәттәр сәйәсәтен нисек тормошҡа ашырыуынан миҫалдар килтереп, Европала мультимәҙәни толерантлыҡ сәйәсәте үҙен аҡламауын, шуға күрә беҙгә милләт-ара татыулыҡ сәйәсәтен булдырыу кәрәклегенә баҫым яһаны. Сөнки совет власы йылдарында булдырылған милләт-ара сәйәсәт дуҫлыҡҡа, татыулыҡҡа, яҙмасыллыҡҡа нигеҙләнгән һәм был ыңғай һөҙөмтә бирә. Күптән түгел генә булып үткән Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы быны тағы бер тапҡыр раҫланы.

- Ил эсендә лә тик ыңғай ғына күренештәр бара тип әйтеп булмай, киреләре лә бар, -тип билдәләне В. Савичев. - Билдәле ваҡытҡа тиклем федераль кимәлдә мониторинг тикшереүҙәре үткәрелде, әммә улар субъектив характерҙа булды. Йәғни был эш менән шөғөлләнеүсе эшсе төркөм хәл-торошҡа үҙенең күҙаллауын объектив хәл-торош тип күрһәтте. Шуға күрә тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәләрен бергәләп анализлау кәрәк, минеңсә. Юҡһа, айырым башҡарыусыларҙың шәхси фекерҙәрен коллектив фекер итеп күрһәтеү дауам итәсәк. Баһалауҙың адекват объектив критерийҙары булырға тейеш. Юҡһа, былтыр республика экстремизмдың сағыу сағылышы булған төбәк тип табылды. Нимәнән сығып тип уйлайһығыҙ? Экстремистик төркөм ағзаларына суд булған өсөн. Был - тейешле структураларҙың ваҡытында иҫкәртеүе генә. Юҡһа, ошондай ваҡиғаларҙы йәшереп ҡалдырған төбәктәрҙә нимә булыуын үҙегеҙ беләһегеҙ. Статистиканы яҡшы итеп күрһәтеп, һуңынан илап ултырырға тура килмәнен өсөн эшләнә был һәм ул көс структураларының сифатлы эше һөҙөмтәһе...

Артабан сығыш яһаусылар баш ҡаланың мәғариф һәм йәштәр сәйәсәте өлкәһендә башҡарылған эштәр менән таныштырҙы, үҙ тәкдимдәрен индерҙе. Сынтимер Баязитов Ватан тарихы әсбаптарында Рәсәй халыҡтарының ҡайһы берҙәренә ҡарата шикле трактовкалар булыуы асыҡланыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, китаптарға бер ни тиклем анализ кәрәклеген билдәрҙе. Ниндәй ҙә булһа айырым бер халыҡҡа йәки милләткә булған бындай дәреслектәр кире мөнәсәбәт уятыуы ихтимал һәм быға юл ҡуйырға ярамай, тине ул. Шуға ла киләһе ултырышҡа Мәғариф министрлығынан вәкилдәр саҡырып, уларҙың сығышын тыңлау бурысы ла ҡуйылды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ултырыш барыбер ҙә күңелдә икеле уйҙар ҡалдырҙы: бер яктан, унда һәр милләттең үҙенең үҙенсәлеге менән үҫешенә гарантия бирелгән дә кеүек, икенсенән, "Рәсәй милләте" тигән төшөнсә уйланырға мәжбүр итә. Милләт быуаттар буйына формалаша икән, берҙәм граждандар йәмғиәте төҙөү өсөн генә яңы милләт уйлап табыу кәрәкме? Совет халҡы булып йәшәнек, ләкин совет милләте түгел инек, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим яҙғанса, рус түгелбеҙ, Рәсәй дәүләтендә йәшәгәс, барыбер ҙә россиялы булдыҡ. Ә хәҙер беҙ кем?**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЯРАТҠАН БАҠСАБЫҘ...
## төҙөкләндерелде



**Баш ҡаланың Киров районында урынлашҡан Салауат Юлаев исемендәге баҡса Башҡортостандағы иң элекке парктарҙың береһе тип иҫәпләнә. Ул ҡала халҡының иң яратҡан урындарының береһе лә. Быны унда капиталь ремонт үткәрелгәндән һуң килгән кешеләрҙең рәхмәт һүҙҙәре лә раҫлай.**

Паркты яңыртыу проекты авторҙары уның боронғо йөҙөнә мөмкин тиклем яҡынлаштырырға тырышҡан. Яңы юлдар буйында художестволы ҡойоу ысулы менән эшләнгән йөҙ суйын фонарь бағана урынлаштырылған, шулай уҡ пантера фигураһы эшләнгән.

Ҡаланың йәш вәкилдәре лә иғтибарҙан ситтә ҡалмаған. Элекке балалар майҙансыҡтары урынына бында заманса ҡаласыҡтар урын алған. Уларҙың береһе сәләмәтлеге сикле балаларға тәғәйенләнгән. Баҡсаның үргә үҙәк майҙанын "Таш сәскә" архитектура композицияһы биҙәй. Ағиҙелгә яңы баҫҡыс буйлап төшөргә мөмкин.

# АҘАШМАҪ ӨСӨН




**Өфө урамдарында Яндекс-карталар менән ун мәғлүмәт стенды ҡуйылды. Унда ҡаланың иҫтәлекле урындары хаҡында мәғлүмәт бирелгән.**

Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, ошо маҡсат өсөн реклама урындарын "Кала рекламаһы" муниципаль бюджет учреждениеһы биргән. Проект Яндекс башланғысы буйынса мэрия менән берлектә ғәмәлгә ашырылған.

Бөгөнгө көндә ҡалала 10 мәғлүмәт стенды бар. Һәр картала яҡында урынлашҡан һәйкәлдәр һәм музейҙар билдәләнгән, уларға нисек барырға һәм юлға күпме ваҡыт китәсәге күрһәтелгән. Мәҫәлән, Еңеүҙең 50 йыллығы скверынан алыҫ түгел 10 музей һәм 20 һәйкәл бар. Ярты сәғәт эсендә - Заманса сәнғәт музейына, 40 минутта Аксаков йортона барып етергә мөмкин. Дөйөм алғанда, макеттарҙа Өфөләге 39 һәйкәл һәм 19 музей урын алған. Музейҙарҙың эш режимы, бәйләнештәр һәм билет хаҡы күрһәтелгән.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# КӨНКҮРЕШ ТЕХНИКАҺЫ АРЗАНАЙҒАН...

**Апрель йомғаҡтары буйынса республиканың аҙыҡ-түлек баҙарында ҡулланыусылар хаҡтары индексы мартҡа ҡарата 100 процент тәшкил итте.**

Елек-емешкә, ҡайһы бер йәшелсәләргә һәм социаль әһәмиәтле аҙыҡ-түлеккә хаҡтар төшкән, ләкин алкоголле эсемлектәр ҡиммәтләнгән. Арыш-бойҙай икмәгенең хаҡы 2 процентҡа, бойҙай оно - 2,3, майлы эремсек, майонез, зәйтүн майы, иретелгән сыр 2,0-5,9 процентҡа ҡиммәтләнгән. Балыҡтарҙың ҡайһы бер төрҙәре 0,6-5,1 процентҡа, һыйыр һәм сусҡа ите - 3,0-9,1, сәй һәм ҡаһүә 1,9-7 процентҡа артҡан.

Аҙыҡ-түлек булмаған тауарҙар 0,7 процентҡа ҡыйбатланған. Кейем, аяҡ кейеме һәм трикотаж әйберҙәрҙең хаҡы - 5,6 процентҡа, йорт өсөн туҡымалар хаҡы 5,1 процентҡа үҫкән. Парфюмерия-косметика тауарҙарына хаҡтар 1,1-5,2 процентҡа, планшет компьютерҙарына - 3,4, кер йыуыу машиналарына 2,2-3,2 процентҡа күтәрелгән. Шуның менән бергә электр сәйнүктәре, миксерҙар, блендерҙар, үтектәр, микротулҡынлы мейестәр, саң һурҙырғыстар һәм һыуытҡыстар 1,0-4,5 процентҡа арзанайған.

Хеҙмәт күрһәтеү тармағында ла хаҡтар 0,7 процентҡа күтәрелгән. Ҡала телефон, телеграф һәм почта элемтәһе хаҡтары 3,5-13,3 процентҡа ҡиммәтләнгән. Медицина хеҙмәттәре уртаса 5 процентҡа, физиотерапия дауалауы бер айҙа 14 процентҡа артҡан.

Дөйөм алғанда, республикала йыл башынан алып инфляция 7,2 процент тәшкил иткән.

# ДАРЫУ ХАҠТАРЫ КОНТРОЛДӘ

**Рәсәй Хөкүмәте 6 майҙағы 434-се ҡарары менән ғүмер өсөн мөһим һәм кәрәкле дарыуҙар исемлегенә ингән препараттарға хаҡтарҙы төбәк кимәлендә контролдә тотоу тәртибен раҫланы. Документ Министрҙар кабинеты сайтында баҫылған.**

Ҡарарға ярашлы, бындай дарыуҙарға өҫтәмә хаҡты төбәк властары билдәләй. Тимәк, аптекаларҙа мөһим дарыуҙарҙың хаҡы һатыу һәм төбәктә билдәләнгән өҫтәмә хаҡҡа бәйле буласаҡ.

Ҡарар дарыуҙар менән күмәртәләп һатыу итеүсе ойошмаларға, дарыуханаларға, фармацевтика эшмәкәрлеге алып барыу өсөн лицензияны булған эшҡыуарҙарға, медицина ойошмаларына ҡағыла.

Төбәк дәүләт контроле системалы рәүештә күҙәтеүҙе, тикшереүҙәр үткәреүҙе, тәртип боҙоуҙарҙы бөтөрөү һәм тәртип боҙоусыларҙы яуаплылыҡҡа тарттырыу буйынса саралар күреүҙе күҙ уңында тота.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Мастопатия

❖ Гормональ регуляция боҙолоуҙан килгән һөт биҙенең сирле үҙгәреше - мастопатия менән яфаланған ҡатын-ҡыҙҙарға кәңәш: 1 кер һабынының яртыһын ҡырғыстан үткәрергә, уртаса ҙурлыҡтағы 1 сиркәү шәмен, 300 мл етен майы өҫтәп, талғын утта 15-20 минут ҡайнатырға, 2 балғалаҡ ҡайын дегете өҫтәп, болғарға. Әҙер майҙы быяла һауытҡа һалып алығыҙ һәм ҡараңғы һалҡын урында һаҡлағыҙ. Ҡулланыр алдынан ағас ҡалаҡ менән болғатырға, шешкә һөрткәс, йылы булһын өсөн, туҡыма һалып бәйләргә. 12 сәғәттән ҡалған майҙы йыуырға. Дауаны көн һайын, шеш юҡҡа сыҡҡансы ҡулланырға.

## Эфир майҙары

❖ Хәҙер дарыуханаларҙа төрлө эфир майҙары һатыла. Таныштарымдың кәңәше менән лаванда, әнис, эвкалипт майҙары алғайным, шуларҙы бөтөн ғаиләмде дауалау өсөн тотонам. Мәҫәлән, баш ауыртып, йөҡлай алмаһам, 10 мл үҫемлек майына 5-7 тамсы лаванда майы тамыҙам, уны маңлайға, сикәләргә һөртәм лә, башыма яулыҡ ябынып ятам. Бер нисә минуттан баш ауыртыуы бөтә, йөҡлап та китәһегеҙ.

❖ Быуындар һыҙлаһа, умыртҡа бағанаһы ауыртһа, ошо май менән ыуам да, целлофан ябып, бәйләйем дә, бер сәғәт түрәнөп ятып торам. Быны көн һайын 10-15 көн эшләйем. Ярты йылға һыҙланыуҙың нимә икәнен дә онотоп торорһоғоҙ.

❖ Һалҡын тейгәндә, киҙеү, ринит, гайморит, фарингит менән ауырығанда ярты литр һыу ҡайнатып, уға 3 тамсы эвкалипт йәки әнис май тамыҙығыҙ һәм быу менән һулағыҙ. Хәл яҡшырғансы көн һайын эшләргә. Әммә һыуға эфир майын күп һалмағыҙ, быуыла башлауығыҙ ихтимал.

❖ Гаймориттан гөлйемеш майы ла яҡшы дауалай. 1 балғалаҡ гөлйемеш майына (уның урынына көнбағыш, зәйтүн майы ҡулланырға ярай) 1 тамсы эвкалипт майы тамыҙып, танауҙы майлайһың. Ныҡ һалҡын тейгәндә эшләһәң, тиҙерәк һауығаһың.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Бактиһәң, беҙ, башҡорттар, батыр, тура һүҙле, асыҡ күңелле, тик бер урында ғына баҫылып ултырып эшләй белмәйбеҙ икән - ошо сифаттарыбыҙҙы астым үҙем өсөн. Ә бына ҡытай һәм корея халҡы шул тиклем егәрле, тырыш.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# АЛЫРЫМ ҠОШ, БИРМӘМ ҠОШ

**Изге ҡош булғанға күрә, боронғо башҡорттар ҡарғаға ҡорбан да килтергән. Был "Ҡарғатуй" йолаһында бутҡа бешереү йәки ҡарға ҡарҡылдағанда: "Бына һиңә май ҙа бал!" тигәндә генә түгел, башҡа йола-ырымдарҙа ла күренә. Мәҫәлән, кемдер берәү ҡарғаны күрһә, ул уға доға уҡып, ризыҡ бирергә тейеш булған.**

Башҡорт фольклорында ҡарғаға кешене ҡорбан итеү күренеше лә осрай. "Урал батыр" эпосында былай тиелә:

*Батшаның тыу биҙәге -*
*Ҡара ҡоҙғон ҡошо бар,*
*Шул ҡоштарҙы йыл һайын*
*Һыйлай торған көнө бар...*
*Ҡойоға ҡыҙҙар һалған һуң,*
*Ҡыҙҙар шунда үлгән һуң,*
*Барыһын алып ҡойонан,*
*Ҡоҙғондарға ташлайҙар...*

Ошондай уҡ сюжет "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосында ла осрай:

*Туҡтамыштың онталған,*
*Һөйәк-һаяғын йыйҙырып,*
*Ҡоҙғондарға һиптереп,*
*Иҙеүкәй ҡайтып киткән, ти.*

Был күренештәрҙе боронғораҡ йоланың сағылышы, тип тә аңлатырға була. Билдәле булыуынса, зороастрийҙар үлгән кешенең кәүҙәһен эттәргә һәм ҡоштарға ташлаған. Был мәрхүмдең йәнен яуыз көстәрҙән һаҡлау, йәғни, йән изге иҫәпләнгән этке йәки ҡошҡа инеп, тиҙерәк ожмахҡа инһен өсөн эшләнгән. Был йола күп кенә халыҡтарға хас булған. Эпостарҙа тап ошо һүрәтләнеүе лә ихтимал. Йән тотем ҡош - ҡарғаға инеп ултырырға тейеш булғандыр. Һуңғараҡ йола үҙенең тәүге мәғәнәһен юғалтҡас, эпостарҙа кеше мәйетенә ҡарата мәрхәмәтһеҙ акт булараҡ сағылыш тапҡан.

"Алырым ҡош, бирмәм ҡош" уйынының генетик тамырҙары ла ҡарға/ҡоҙғонға кешене ҡорбан итеүгә барып тоташа. "Ҡарғатуй" байрамында уйналған был уйында әсә (ҡайһы бер варианттарҙа: мәсекәй) үҙенең артына теҙелгән балаларын ҡоҙғондан һаҡлай. Уйын "ҡоҙғон" бөтөн балаларҙы тотоп бөткәнсе дауам итә.

Ҡарға/ҡоҙғонға тәүҙә кешене ҡорбан итеүҙәре "Ҡоҙғон ҡысҡыра, ауылдан мәйет һорай" тигән ышаныуҙа ла күренә. Һуңғараҡ ҡорбан итеп мал, ҡош килтерелгән, тағы ла аҙағыраҡ ҡорбан бутҡа, әсе ҡатыҡ, бал менән алышынған, күрәһең. Ҡарға культы башҡорттарға ғына түгел, башҡа милләттәргә лә хас булған.

Шулай итеп, ҡарға культының тамырҙары бик боронғо. Башта кеше ҡарғанан килеп сыҡҡан, тип уны изгеләштерһәләр, һуңғараҡ ул тотемға әйләнеп китә. Ҡаты ерҙе, утты барлыҡҡа килтереүсе, тере, үле, һауалағы, ерҙәге һыуҙар менән идара итеүсе ҡарға власть символы ла булып торған. Төрлө ышаныуҙарҙа үлем менән бәйле булыуы уның ҡасандыр тереләр менән үлеләр донъяһын бәйләп тороусы итеп тә һүрәтләй.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

**"Йәшлек - кешенең яҙ миҙгеле, был осорҙа тормоштоң киләсәгенә орлоҡ сәселә", тигән бер аҡыллы әҙәм. Әммә йәш саҡта киләсәк тураһында артыҡ ныҡ ҡайғырмайһың, көҙөң еткәс урып алаһы уңыштар тураһында ла уйланмайһың. Оло быуын кешеләре йәштәрҙе һәр ваҡыт шул бошмаҫлыҡта ғәйепләй ҙә инде. Ә шулай ҙа замана йәштәре киләсәген күҙалламай йәшәйме икән? Был һорауға яуап табыу өсөн Санкт-Петербург ҡалаһында белем алыусы, былтырғы "Салауат йыйыны" республика фольклор байрамының "Батыр тоҡомо" этноконкурсында Гран-при яулаусы Айназ НИЗАМЕТДИНОВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

# КИЛДЕМ, КҮРҘЕМ, ЕҢДЕМ...



## Йәштәребеҙҙең үҙ алдына ошондай девизды ҡуйғаны

**➔ Уҡыу - энә менән ҡойо ҡаҙыу, тиҙәр. Санкт-Петербург ҡалаһы юғары уҡыу йортонда белем алыу ауырға төшәме?**

- Санкт-Петербург Механик һәм оптик информацион технологиялар милли тикшеренеү университетында фотоника һәм оптик информатика факультетында уҡыйым, һөнәрем буйынса махсус тәғәйенләнешле оптик приборҙар инженер-конструкторы буласаҡмын. Был һөнәрҙе үҙләштереүселәр һирәк, шуға күрә, уҡып бөткәс, теләгән ерҙә эш таба алырыма ышанам. Апайым да ошо уҡ университетта уҡыны. Уның һөйләгәндәрен тыңлап йөрөй торғас, үҙемдең дә шунда уҡығым килде. Интернет аша үҙемә оҡшаған факультетты һайлап, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡығанда уҡ маҡсатлы рәүештә әҙерләнә башланым. Ул ваҡытта фотоника һәм оптик информатика факультетына уҡырға инеү өсөн рус теле, математика, информатика фәндәре буйынса иң кәмендә 215 балл йыйырға кәрәк ине. Быйыл талаптар бер аҙ йомшарған, тинеләр, шулай ҙа дөйөм балл 200-ҙән дә кәм булмаҫҡа тейеш.

Хәҙер мәктәп уҡыусыларын Берҙәм дәүләт имтихандары менән ҡурҡытып ҡына торалар, әммә уны тапшыра алаһыңмы, юҡмы, быныһы үҙеңдән генә тора. Әгәр ҙә тырышһаң, гел генә белемеңде камиллаштырһаң, аҙ ғына буш ваҡытыңды ла ниндәйҙер файҙалы эш менән уҙғарһаң - видеокамера, күҙәтеүселәр алдында ҡаушап ҡалмайһың. Сөнки ҡулыңа ручка ғына тотоп инһәң дә, башыңда теләһә ниндәй ауыр һорауға яуаптар була. "Тарышҡан тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан" ти халыҡ мәҡәле. Тырышлыҡ, маҡсатыңа өлгәшә белеү сифаты һуңынан юғары уҡыу йортона уҡырға ингәс тә бик кәрәк.

Уҡытыу тәртибе үҙенсәлекле был уҡыу йортонда. Университет дистанцион уҡытыу системаһы буйынса эшләй. Студент өсөн кәрәк мәғлүмәттәр: лекцияларҙы, китаптарҙы, хатта баһаларыңды, ҡайһы көндәрҙә ниндәй дәрестәргә барыуың йәки бармауың, факультеттың башҡа студенттары менән сағыштырмаса рейтингың ниндәй булыуын дистанцион уҡытыу үҙәге аша ҡарарға мөмкин. Был һәр кемгә ваҡытын үҙе теләгәнсә бүлеп, көн тәртибен төҙөр өсөн бик уңайлы. Мәҫәлән, иртәнсәк иртә менән бер дәрескә бара алмайһың икән, һин был предметты уңайлы ваҡытта үҙаллы үҙләштереп ҡуяһың. Шәхсән минең өсөн төрлө рейтингтар, билдәләр артыҡ ҙур әһәмиәткә эйә түгел, белемем мөһимерәк. Шуға күрә, мин үҙемә оҡшаған фәндәр буйынса өҫтәмә рәүештә шөғөлләнәм, бүтән предметтарҙы тик ваҡытында уҡып, уҡытыусылар талап иткән эштәрҙе үтәп кенә барам.

**➔ "Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул", тигән боронғолар. Һинең ошо фекергә ҡарашың ниндәй?**

- Санкт-Петербург ҡалаһына уҡырға киткәс кенә Башҡортостанымды нисек яратыуымды аңланым. Мәктәптә уҡыған сағымда күберәк сит ил йырсыларын, музыкаһын тыңлай инем. Хәҙер башҡорт йырҙарына өҫтөнлөк бирәм. Күптәр республикала ғына булған башҡорт мөхитен һағына. Бер танышым, мәҫәлән, башҡорт китаптарын алып килеп уҡый. Тыуған ерҙең ҡәҙере ситтә нығыраҡ беленә икән шул. Шуға ла эшләргә мотлаҡ Башҡортостанға ҡайтырға ниәтләйем.

Кемдер, бәлки, ситкә сығып уҡыуҙың да кире яҡтарын һанап бирә алыр, үҙ ереңдә олтан булыу яҡшыраҡ, тип тә әйтер. Әммә белем алыу өсөн ситкә китеүҙе мин аҡлайым. Был иленде яратмау, тигән һүҙ түгел бит. Әгәр ҙә атай-әсәйең бала сағыңдан уҡ илһөйәр итеп тәрбиәләгән икән, һин бер ваҡытта ла милләтең өсөн юҡҡа сыҡмаясаҡһың. Илһөйәрлектең тәүге сағылышы - ул хәҙерге глобалләштереү шарттарында ата-бабалар телендә һөйләшеп йөрөү. Йәштәштәрем араһында халыҡ мәнфәғәттәре өсөн тырышып эшләгән, башҡорт телендә яҡшы һөйләшкән, бөтөн ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе үтәгән, рухлы кешеләр күп. Улар башҡорт булыуынан оялмай, туған телендә һөйләшеүҙән тартынмай, тимәк, башҡа милләттәр йоғонтоһон бирелмәйәсәк, тамырҙарын онотмаясаҡ.

Санкт-Петербургта төрлө милләт вәкилдәре бергә уҡыйбыҙ, йәшәйбеҙ. Баҡтиһәң, беҙ, башҡорттар, батыр, тура һүҙле, асыҡ күңелле, тик бер урында ғына баҫылып ултырып эшләй белмәйбеҙ икән - ошо сифаттарыбыҙҙы астым үҙем өсөн. Ә бына ҡытай һәм корея халҡы шул тиклем егәрле, тырыш. Физика, математика, информатика кеүек предметтарҙы яҡшы үҙләштерәләр. Беҙгә уларҙан күп нәмәгә өйрәнергә булыр ине. Шәхес булараҡ үҫешәм тиһәң, үҙ өҫтөңдә даими эшләргә кәрәк. Боронғо Рим сәйәсмәне, дәүләт эшмәкәре Юлий Цезарҙың "Килдем, күрҙем, еңдем", тигән һүҙҙәрен тормош девизым тип һанайым. Шуға күрә башлаған эште еренә еткереп ҡуйырға, уңыштарға ынтылырға күнеккәнмен. Әлеге көндә минең өсөн белем алыу мөһим, сәнғәткә һәм спортҡа хобби итеп кенә ҡарайым, әммә йырларға ла, бейергә лә, йәмәғәт эштәрендә ҡатнашырға ла өлгөрәм. Ата-әсәйемдең йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәҫкә, ситтә йөрөгәндә башҡорт исеменә тап төшөрмәҫкә тырышам.

**➔ Йәштәрҙең ҙур ҡалаларға, сит илдәргә уҡырға китеү ынтылышын нисек аңлатыр инең?**

- Кемгә нисек, минең өсөн Санкт-Петербург ҡалаһына уҡырға китеүем үҫеш баҫҡысының киләһе этабына күтәрелеү булды. Йәш саҡта донъя күреп, төрлө кешеләр менән аралашып йәшәргә кәрәк. Санкт-Петербург шундай матур ҡала, унда музейҙар, мәҙәни үҙәктәр күп. "Эрмитаж" дәүләт музейын бер аҙна эсендә лә урап сығып булмай. Беҙ унда инеп, иртәнән кискә тиклем ҡарап йөрөп, ваҡыт үткәнен дә һиҙмәй килеп сыҡһаҡ, баҡтиһәң, бер залында ғына булғанбыҙ! "Эрмитаж"дан тыш, Санкт-Петербургта донъя кимәлендә билдәле шәхестәрҙең эштәре ҡуйылған, тарихи ҡомартҡылар һаҡланған иҫ киткес музейҙар әллә күпме. Белем даирәһен киңәйтеү, фәһем һәм аҡыл, тормош тәжрибәһе туплау өсөн дә кешегә сит яҡтарҙы күреп ҡайтыу кәрәк. Юҡҡа ғына элек сәсәндәр, уҡымышлы шәхестәребеҙ йылдар дауамында сит илдәргә сығып, билдәле аҡыл эйәләренә барып уҡып, донъя гиҙеп йөрөмәгәндер. Шуға күрә, йәштәрҙең сит илдәргә, ҙур ҡалаларға ынтылыуына мин ыңғай ҡараштa. Тик был ынтылыштың маҡсаты - киләсәктә Башҡортостанға кире ҡайтып, өйрәнгән белемеңде үҙ милләтең файҙаһына ҡулланыу булырға тейеш. Бер ниндәй ҡайғыһыҙ, уйһыҙ, үҙ мәнфәғәтеңде ҡайғыртып ҡына йәшәүҙең мәғәнәһе юҡ ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Замана уҡыусыһына тик йор һүҙҙәре аша ғына таныш булған немец ғалимы, публицист Георг Лихтенберг былай тигән: "Киләсәккә нигеҙ хәҙер үк һалынырға тейеш. Был план тип атала. Унһыҙ донъялағы бер нәмә лә яҡшы була алмай". Ә бөгөн беҙҙең йәштәр араһында белемен камиллаштырыу өсөн тырышып уҡыған, үҙенең һәләттәрен һәр яҡлап үҫтергән, халҡының һәм иленең яҙмышын ҡайғыртҡан, маҡсаттарына өлгәшеү өсөн пландар ҡороп йәшәүсе кешеләр бар икән, уларҙы беҙ бошмаҫ булыуҙа йә ахмаҡлыҡта ғәйепләй алабыҙмы икән?..**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

ХӘҠИҠӘТ БЫЛ!

# ИЗГЕ ҺУҒЫШ - ЙЫҺАД,

## йәғни Ғабдрахман Рәсүлевтың Бөйөк Ватан һуғышына биргән фәтүәһе

**Бөйөк Ватан һуғышы башланыуы ил етәкселеген ҡайһы бер мәсьәләләргә ҡарашын, мөнәсәбәтен үҙгәртергә мәжбүр итә. СССР баштан уҡ атеистик дәүләт тип иғлан ителеүгә һәм дингә ҡаршы көслө көрәш алып барылыуға ҡарамаҫтан, ҙур ҡурҡыныс тыуыу менән дәүләт дини ойошмаларға, дин әһелдәренә ихтыяж барлығын таный. Шул иҫәптән 30-сы йылдарҙа властың ҡаты ҡыҫымы аҫтында булған Өфөләгә мосолмандарҙың Үҙәк диниә назаратына ла мәрхәмәтле мөнәсәбәт булдырыла.**



Ул ваҡытта мөфтөй булған Ғабдрахман Рәсүлевтың ҡыҙы Сафуат Рахманҡулова үҙ иҫтәлектәрендә: "1941 йылдың август айында беҙҙең өйгә Башҡорт АССР-ы Хөкүмәте рәйесе килде. Улар атайым менән оҙаҡ ҡына ваҡыт аралашты. Ҡунаҡ Совет власының Ислам диненә ирек биреүен, дини ойошмаларҙың эшмәкәрлеген ҡыҫыраҡламаясағын, элек ябылған мәсеттәрҙең ҡабаттан асыласағын әйтте. Ошонон менән Үҙәк диниә назараты эшмәкәрлегенең яңы этабы башланды. Совет хөкүмәте өсөн кәрәкмәгән ойошманан ул файҙалы үҙәккә әйләнде", - тип хәтергә ала. Был осрашыуҙан һуң Ғабдрахман Рәсүлев Үҙәк диниә назараты исеменән мосолмандарға мөрәжәғәтнамә яҙа. Мөрәжәғәттә Совет власының динде ҡыҫмаясағы, мәсеттәр тергеҙеләсәге, уларҙа лайыҡлы имамдар хеҙмәт итәсәге, мосолмандар ҡурҡмайынса дини йолаларҙы, ғибәҙәттәрҙе үтәй аласағы әйтелә. *"Әлеге ваҡытта ҡурҡыныс һуғыш бара. Беҙҙең Ватаныбыҙ, ғаиләләребеҙ ҡурҡыныс аҫтында. Беҙ, Советтар Союзы мосолмандары, Ҡыҙыл Армияға, бәләгә тарығандарға, ҡасаҡтарға ярҙам өсөн бар көсөбөҙҙө һалаСаҡбыҙ. Һәр мосолман был эшкә хеҙмәте һәм аҡсалата ярҙамы менән үҙ өлөшөн индерәсәк"*, - тип мөрәжәғәт итә Ғабдрахман Рәсүлев дин ҡәрҙәштәренә. Мөрәжәғәт башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, үзбәк телдәрендә баҫтырылып, төрлө ҡалаларға ебәрелә. Мәсеттәрҙә, завод цехтарында, ҡала йыйылыштарында уҡыла. Фронтҡа ярҙам эшенә мосолмандар әүҙем ҡушыла. Улар, төрлө төбәктәрҙә йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, фронт өсөн аҡса күсерә һәм ошо туралағы квитанцияларын Үҙәк диниә назаратына ебәрә башлай. Аҡса күсереүҙәр буйынса күҙәтеү алып барған Башҡорт хөкүмәте иғәнәләрҙең күплегенә хайран ҡала.

Бөйөк Ватан һуғышына тиклем Совет власы Үҙәк диниә назаратын төрләсә ҡыҫырыҡлай, уның проблемаларына битараф ҡала. Ләкин илгә ябырылған бәлә уларҙың дингә ҡарата мөнәсәбәтен үҙгәртергә мәжбүр итә. 1942 йылда Өфөлә Үҙәк диниә назаратында Советтар Союзы мосолмандарының гәҙәттән тыш съезы үткәрелә. Унда сығыш яһағанда Ғабдрахман Рәсүлев дин ҡәрҙәштәренә түбәндәге һүҙҙәр менән мөрәжәғәт итә. *"Хөрмәтле мосолмандар! Аллаһы Тәғәләнең һәм уның рәсүле Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең әмере беҙҙе үҙ көсөбөҙҙө йәлләмәйенсә һуғыш яландарында Ватаныбыҙҙы, мосолман донъяһын, бар кешелекте азат итеү өсөн фашист илбаҫарҙарына ҡаршы һуғышырға саҡыра. Тылда ҡалған ирҙәр һәм ҡатындар, ҡыйыуһыҙлыҡҡа һәм паникаға бирелмәгеҙ. Һуғышты унышлы алып барыр өсөн кәрәкле әйберҙәр эшләү һәм халыҡты тәьмин итеү өсөн бар көсөбөҙҙө һалыбыҙ. Фашист Германияһына һәм уларҙың куштандарына ҡаршы Ватан һуғышында үҙегеҙҙең хаҡлығығыҙҙа дәлилләп, бар донъя алдында Тыуған илегеҙҙе тоғрологоғоҙҙо иҫбатлағыҙ. Мәсеттәрҙә һәм ғибәҙәт булмәләрендә Ҡыҙыл Армияның еңеүенә доға уҡығыҙ. Беҙ, Советтар Союзында йәшәгән Ислам ғалимдары һәм дин әһелдәре, бар мосолмандарҙы бергәләшеп Ватаныбыҙҙы һәм бөтә мосолман донъяһын фашистарҙан һәм уларҙың ҡуштандарынан һаҡларға саҡырабыҙ. Бөйөк һәм Шәфәғәтле Аллаһтан дошмандың тиҙ арала еңелеүен һорайбыҙ"*, - ти мөфтөй. Мөрәжәғәт Советтар Союзының бар мосолман халыҡтары телдәренә, ғәрәп, төрөк, хинди телдәренә тәржемә ителә һәм ҙур тираждар менән таратыла. Мөрәжәғәттең ҡағыҙ варианты илдәге күпселек имамдар, мөхтәсибтәр имзаһы аҫтында "Труд" гәзитендә баҫыла. Дин әһелдәре фәтүәһенә ярашлы, Бөйөк Ватан һуғышына мосолмандар өсөн изге һуғыш - **йыһад** статусы бирелә. Бөгөнгө көндә был хаҡта бик аҙҙар белә. Үҙәк, уның идеологияһын булдырырға тырышҡан тарихсылар ошо тарихи ваҡиғаны ситләтеп үтә, шуға күрә ләүкыу йорттарында уҡытылған тарих китаптарында уны осратыу мөмкин түгел.

Һуғыш ваҡытында Үҙәк диниә назараты янындағы мәсеттә (Тукай урамы) йәмәғәт менән биш ваҡыт намаҙ, йома, байрам намаҙҙары уҡыла. Йәштәр ҙә, оло-лар ҙа Аллаһ йортона йөрөй. Шулай уҡ мәсеткә килеүселәр араһында эргәләге хәрби госпиталдә дауаланған һалдаттар ҙа була. Йәйгеһен унда үтә күп халыҡ йыйыла. Шуға күрә ғибәҙәттәр ихатала үткәрелә. Өфөнән алыҫ түгел урында "трудармия" тора. Ундағы һалдаттар оборона заводында яңы цехтар төҙөү менән шөғөлләнә. Башлыса Урта Азиянан булған һалдаттар урыҫ телен белмәй, тыуған телдәрендә һөйләшә, милли кейем кейеп йөрөй. Йәшәү шарттары бик хөрт була. Һалдаттар Урал тауҙарының климатына ауырлыҡ менән яраҡлаша, йыш ауырыйҙар, яҡында дауахана булмағанға, күптәре вафат була. Ғабдрахман Рәсүлев был турала белеп ҡалғас, шунда уҡ кәрәкле саралар күрә. Башҡортостан мосолмандары һалдаттарға кейем-һалым, аҙыҡ-түлек менән ярҙам итә. Мөфтөйҙөң ярҙамсыһы Мөхәммәт хәҙрәт йома һайын хәрби частҡа барып йөрөй. Диниә назараты һорауы буйынса был көндә һалдаттар ял итә, мунса төшөп, йома намаҙында ҡатнаша.

Үҙәк диниә назараты зәҡәттең мотлаҡлығын иҫкәрткән фәтүә ҡабул итә. 1943 йылда "Известия" гәзитендә баҫылған телеграммала Ғабдрахман Рәсүлев танк колоннаһын төҙөү өсөн 50 мең һум индереүен хәбәр итә һәм мосолмандарҙы ошо эшкә ҡушылырға саҡыра. Сталин уға яуап итеп: "Һеҙгә Ҡыҙыл Армияның бронетанктары хаҡындағы хәстәрлегегеҙ өсөн рәхмәтемде белдерәм. И. Сталин", - тип яҙа. 1943 йылда Ғабдрахман Рәсүлев Сталин менән осраша. Был осрашыуҙа ил башлығы мосолмандарҙың, Үҙәк диниә назаратының, мөфтөйҙөң фашизмға ҡаршы һуғышта ҙур ярҙам күрһәткәне өсөн рәхмәтен белдерә.

Һуғыш йылдарындағы эшмәкәрлеге өсөн Үҙәк диниә назаратына бер аҙ йомшаҡ мөнәсәбәт күрһәтелә. Һуғыштан һуң китап сығарырға рөхсәт ителә. Ғабдрахман Рәсүлев әҙерләгән ғәрәп хәрефтәре менән йыйылған "Ислам" тип аталған китап Мәскәүҙә донъя күрә. Бер нисә айҙан 28 данаһы кириллицаға әйләндерелеп, күсерелеп яҙыла. Мөфтөй уларҙы урта йәштәге иң ышаныслы, лайыҡлы кешеләргә генә тапшыра.

**Ислам тәғлиммәтен тотоусылар менән Үҙәк араһында аңлашылмаусылыҡ тыуған ваҡыттар күп була. Шул уҡ ваҡытта был уларға Рәсәй империяһына, Советтар Союзына ҡурҡыныс янағанда уртаҡ Ватанды һаҡлап сығырға ҡамасауламай. Ғабдрахман Рәсүлев һәм шул замандағы дин әһелдәре, йәберләнеүҙәрен, эҙәрләкләнеүҙәрен, репрессияларға дусар ителеүҙәрен онотоп, дин ҡәрҙәштәрен дөйөм дошманға ҡаршы өндәр көс таба. Шул арҡала улар Советтар Союзында Ислам диненең ниндәй ауыр хәлдә икәнен белеп, мосолмандарҙы үҙ яғына ауҙарырға тырышҡан немец пропагандаһына алданмай, илгә ҡаршы әстән сығыш яһаусы көскә әйләнмәй.**

Азамат ӘБУТАЛИПОВ
әҙерләнә.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Сергей РУДЕНКО

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың этногенезы мәсьәләләре

Көнсығыш өлкәнең төньяҡ һәм көньяҡ райондары араһында өсөнсө - төгө ике райондан айырылып торған типтағы башҡорттар йәшәүсе тағы бер район бар. Ул үҙе Ағиҙел йылғаһының һул яғында урынлашҡан көнсығыш һәм уң яғындағы көнбайыш өлөшкә бүленә. Уның көнсығыш өлөшөнә ҡатайҙар, күбәләк-теләүҙәр, тамъян-түңгәүерҙәр инә. Көнбайыш өлөшөндә гәрәй-ҡыпсаҡтар, тамъян-түңгәүерҙәр, ҡарағай-ҡыпсаҡтар һәм өлөшләтә бөрйәндәр йәшәй.

Ағиҙел йылғаһынан көнсығыштараҡ йәшәгән был район башҡорттары ошо өлкәлә йәшәүсе башҡа башҡорттар менән сағыштырғанда кәмерәк пигментацияланған (ҡуңыр тип 71,7 процент). Уларҙың уртаса буй оҙонлоғо күрше төньяҡ-көнсығыш районындағы кеүек 164,1 см. Әммә улар оҙон аяҡлы (скелияның уртаса күрһәткесе 87,3). Баштың уртаса күрһәткесе өлкәнең башҡа райондары халҡы менән сағыштырғанда түбәнерәк (түнәрәк башлылар 65 процент булғанда 81). Бынан тыш, улар тар танаулы (танауҙың уртаса күрһәткесе 72,2) һәм тар йөҙлө (биттең уртаса күрһәткесе 76). Ошо районың Ағиҙел йылғаһынан көнбайыштараҡ йәшәүсе башҡорттары, киреһенсә, ныҡ пигментацияланған (ҡуңыр тип 88,8 процент), буйҙары ла сағыштырмаса оҙон (165,1 см), оҙон аяҡлылар (скелияның уртаса күрһәткесе 88,8). Баштың уртаса күрһәткесе буйынса улар мезатикефалдар (түңәрәк башлылар 50,2 процент булғанда баштың уртаса күрһәткесе 79,5). Ошо районың көнсығыш өлөшө башҡорттары кеүек уҡ тар танаулылар (танауҙың уртаса күрһәткесе 72,4), шундай уҡ тар йөҙ күрһәткесенә эйәләр (76,7) һәм был уларҙы өлкәнең көньяҡ районы башҡорттары менән яҡынайта.

Шулай итеп, сағыштырмаса оҙон аяҡлылыҡ, уртаса түңәрәк башлылыҡ, сағыштырмаса тар йөҙлөлөк һәм тар танаулылыҡ ошо район башҡорттарын башҡа райондыҡыларҙан айырып тора. Был районда башҡорттарҙың типтәрҙәр һәм өлөшләтә татарҙар менән ҡатнаш йәшәүе менән аңлатыла.



Ошо районың көнбайыш өлөшөндәге тау башҡорттарының типик вәкилдәре булып һүрәттәрҙә күрһәтелгән башҡорттар иҫәпләнә ала. Әйткәндәй, был районың долихокефалдары араһында тәпәш буйлы һәм тар йөҙлө, биттәрендә төклөлөк ныҡ булған башҡорттар ҙа осрай (**һүрәт**). Райондың көнсығыш өлөшөндә оҙон буйлы, әммә сағыштырмаса ҡыҫҡа аяҡлы, түңәрәк башлы, тар йөҙлө һәм тар танаулы, көнсығыш өлкәһе башҡорттарының төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында ла һирәк булмаған тибы осрай (**һүрәт**).

Сағыштырмаса оҙон буйлы тау һәм долихокефал тибындағы башҡорттарҙың ҡайҙан килеп сығыуын әйтеүе ауыр. Күрәһең, ул крайҙың боронғо халҡынан, савроматтарҙан йәки иирктарҙан ҡалғандыр.

✓ *Иң аяныслыһы: формалашып килгән аңдарға интернет аша ҡеүәтле интервенция эшләнә. Уның ниндәй йоғонто яһағанын әлеге мәлдә аңламайбыҙ әле. Интернеттың АҠШ-тың махсус хеҙмәттәренең емеше икәнен беләбеҙ.*



**Тарихты белеү кешегә килеп тыуған мәсьәләләрҙе хәл итергә ярҙам итә, уны аңлай белгән кеше донъяға анализ күҙлегенән ҡарай һәм һәр ваҡиғаның асылына тиҙ үк төшөнә ала. Үткәндәрҙе белеү тормошта юғалып ҡалмаҫҡа булышлыҡ итә, бәлки, унан ғибрәт ала белгәндәрҙе хаталаныуҙан да аралай. Шул уҡ ваҡытта тарихтың пропаганда, идеология ҡоралы булыуын да хәтерҙән сығарырға ярамай. Яңылыш тәфсирләнгәндә уның миллионлаған кешеләрҙең башын бутап, фажиғәгә килтереүе лә ихтимал. Ысынбарлыҡта иһә, тарих насар ҙа, яҡшы ла булмай, ул факт, булған хәл. Уны кешенең нисек аңлауы, аңлатыуы һәр кемдең үҙенән тора. Башҡортостан Республикаһының Милли музейы директоры Ғәле Фәйзрахман улы ВӘЛИУЛЛИН менән тарихтың фәлсәфәүи аспекты, уның кеше аңдарына, киләсәк быуындарға күрһәткән йоғонтоһо, ул биргән һабаҡтар, бөгөнгө заман менән бәйләнеше хаҡында фәлсәфә ҡорабыҙ.**

# АҢЛАҒАНҒА –
## йәки тарих хаҡында

**▸ Тарихты өйрәнеү нимә бирә кешегә? Ҡасандыр булған еңеүҙәр, еңелеүҙәр, уңыштар, хаталар хаҡындағы мәғлүмәт тормошта ярҙам итәме? Тарихты белмәү иһә зыян килтерәме?**

- Тарих фән генә түгел, донъяның бер ҙур таянысы ул. Ябай халыҡ араһында ла, зыялылар мөхитендә лә "Тарихты белмәгән кешеләр киләсәкте лә фараз итә алмаясаҡ", "Тарихты белмәгән киләсәккә пландар ҡуя алмаясаҡ", тигән фәлсәфәүи уйҙырмалар бик күп. Тарихты яҡшы белеү бөгөнгө граждандар, бигерәк тә йәштәр өсөн иң ҙур таяныстарҙың береһе булып тора. Бөгөнгө көндә тарихты насар үҙләштереү арҡаһында төрлө ҡыҙыҡлы ла, ҡыҙғаныслы ла хәлдәр килеп сыға. Рус әҙәбиәте буйынса сығарылыш имтихандарының беренсе этабында Мәскәү ҡалаһында бер уҡыусы 1812 йылдағы Ватан һуғышы контексында яҙылған эшендә: "Пьер Безухов пистолетын тотоп, Мәскәү буйлап Гитлерҙы үлтерергә йөрөгән", - тип яҙҙы. Эйе, бер кеше генә дөйөм тенденцияны сағылдыра алмай, әммә ошондай осраҡтар хаҡында йыш ишетергә тура килә. Ысынлап та, ябай ғына тарихты ла белмәгән быуын үҫеп килә. Тарихты белмәү кешенең үҫешенә тотҡарлыҡ яһай бит ул. Ундайҙар йәмғиәттә һулыған сәскә кеүек шиңеп ҡала.

Белем алыуҙы, уны камиллаштырыуҙы, академия тамамланым, диссертация яҙҙым, архивтарҙы ҡарап сыҡтым, тигән һылтау менән дә, хатта бер көнгә лә туҡтатырға ярамай. Тормош көн һайын сиселешен талап иткән яңы һорауҙар ҡуя, көнүҙәк мәсьәләләрҙе даими рәүештә хәл итергә тура килә. Ә яуапты ҡайҙан табаһың? Кеше аңы сикле бит, ә тарихта ошо проблемаларҙың айышын аса алырҙай яуаптар ята. Яуаптар ҙа бер төрлө түгел, һәр осраҡтың үҙ хәле, сиселеше бар. Етмәһә, тарих үҙе лә идеологик фән, уны ниндәй тарихсылар өйрәнгәнен, улар ниндәй ҡарашта булғанын да белеү, ошо идеологик буяуҙарҙан юғарыраҡ күтәрелеп анализ эшләү мөһим. Мәҫәлән, совет осоронда беҙ ҡыҙылдарҙы ғына кеше итеп күрһәтеп, аҡтар хәрәкәте тулыһынса дошман булған, тип фараз ҡылдыҡ. Бөгөнгө көндә иһә, совет осоронда киң ҡулланылышта булған "Граждандар һуғышы геройы" терминын ҡулланырға тел әйләнмәй, был һүҙбәйләнеш күңелебеҙгә ятмай. Ата улды үлтергән заманда ниндәй герой булыуы мөмкин? Хәҙер Граждандар һуғышында әүҙем ҡатнашҡан кешеләр, тип һөйләйбеҙ. Чапаев геройһы? Төптәнерәк уйлаһаң, ул бер ҙә герой түгел. Тик большевик күрһәтмәләрен үтәп, ҡыҙылдарҙы алға алып барған, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ябай һалдаттан дивизия командиры дәрәжәһенә еткән кеше. Ағалы-ҡустылы Кадомцевтар геройҙармы? Улары банктарҙы, кешеләрҙе талап йөрөгән кешеләр. Эйе, улар совет идеологияһы, большевиктар өсөн файҙа килтергән геройҙар. Әммә икенсе яҡтан улар йәмғиәт закондарын боҙоп йөрөүсе кешеләр. Бөгөн беҙ партия идеологияһынан арынып, матур итеп һығымта яһай белергә тейешбеҙ.

**▸ Улай булғас, ысын тарихты ниндәй сығанаҡтарҙан өйрәнергә һуң? Интернетҡа ышанып булмай, ул, киреһенсә, күптәрҙе яңылыш юлдан алып китә...**

- Бына ошо ваҡытлы идеологияларҙан азат тарих, уның ысынбарлығын сағылдырған экспонаттар, материалдар музейҙарҙа ғына һаҡланып килә. Бында тарих закондарын бер кем дә боҙа алмай. Тарих - ул ваҡыт, ваҡыт тәбиғәт закондарына буйһона, партия идеологияларының ғына уны икенсе юҫыҡҡа бороп алып китерлек көсө юҡ. Совет власы ла килде лә китте бит. Ә тарих алға елә, бер ҙә туҡтамай аға. Уны үҙеңдең ҡараштарыңа ярашлы тәфсирләп була, ләкин ауыҙлыҡлап булмай. Ниндәй генә бөйөк шәхес булмаһын, кеше аҡылы, есеме менән тарихты аңлап етеүгә барып етмәгән, барып етергә ғүмере лә етмәйәсәк.

Бөгөнгө көндә йәштәрҙең тарихты насар белеүе дәреслектәрҙең, уҡытыу методикаһының бик күп төрлө булыуы менән дә бәйле. Иң аяныслыһы, формалашып килгән аңдарға интернет аша ҡеүәтле интервенция эшләнә. Уның ниндәй йоғонто яһағанын әлеге мәлдә аңлау кимәленә етмәгәнбеҙ әле. Глобалләшеү тип әйткән булабыҙ, ә ошо глобалләшеү артында кеше аңдары менән идара иткән көс ята. Интернеттың АҠШ-тың махсус хеҙмәттәренең, ЦРУ-ның емеше икәнен беләбеҙ. Ә ни өсөн улар быны эшләне һуң? Сөнки ошо юл аша электрон приборҙар менән ҡулланған бөтә кешеләр хаҡында мәғлүмәт туплау мөмкинлеге тыуа. Беҙ ошо системаның ҡолона әйләнеп барабыҙ, әйләндек, тиһәк тә була. Үҙебеҙҙең ошо системаның бер шөрөбө булып ҡалғаныбыҙҙы аңлап та бөтмәйбеҙ. Бөтә донъя селтәрендә матур ғына программалар эшләүселәр беҙҙең уйыбыҙға яңы йүнәлеш бирә, беҙҙе ҡурсаҡҡа әйләндереп, идара итә, беҙҙең турала "хәстәрлек" күрә. Ошондай бер һынылышлы мәлгә килеп еттек. Эҙемтәләре ниндәй һуң? Ошо ауға килеп эләгеп, шашҡан кешеләрҙең фетнәһен Ливияла, Мысырҙа, Сүриәлә күрҙек инде, хәҙер Украинала күҙәтәбеҙ.

Элек йәмғиәттең коллектив аңына үҙгәрештәр индереү өсөн бер быуат ваҡыт кәрәк булһа, бөгөн бының өсөн 5-10 йыл да етә. Шул сәбәпле, оло тормошҡа саҡ тәпәй баҫҡан йәштәргә төрлө идеяларҙы биреүҙәре арҡаһында 20-25 йәшлек егеттәр фашистик уйҙар менән урамға сыға. Юҡ, улар тарихын, ата-бабаларын онотмай, улар был турала фараз яһарға ла ынтылмай, мейеләрендәге бер ҡылды ла ҡыбырлатмай. Украинала ни күрәбеҙ? Бөтә асыуҙы Рәсәй яғына ҡарап, ата-бабалары ҡаршы һуғышҡан дошмандарҙың исемдәрен күтәреп һөйләйҙәр.

Һәр кешенең шәхси талабы иленән дә, ерҙән дә, ата-әсәнән дә өҫтөнөрәк тигән ҡараш таратыла. Ололарҙы ихтирам итеү тигән нәмә юҡҡа сыға бара. Аҡсаны күберәк эшләү, бөтә проблемаларҙы аҡса менән хәл итеп була, тигән уйҙырмалар һалына. Тормош матурая, киңәйә, ә тәрбиәүи эш аҫҡа тәгәрәй кеүек. Америка ғалимдары тикшеренеүҙәр үткәргән. Улар һуңғы 20 йыл эсендә кешегә ихтирам менән ҡарау 2-3 тапҡырға кәмегән, тигән һығымтаға килгән. Интернеттың насар йоғонтоһо, кешенең патриотик нигеҙҙән айырылыуы, бөтә Ер шары гражданы булырға тырышып, үҙ халҡының традицияларын һанға һуҡмауы ла ошондай күңелһеҙ һандарҙы дәлилләй.

Эйе, тарихҡа күҙ һалһаҡ, һәр ваҡыт оло быуын йәштәрҙе әрләгән. Йәштәрҙе бер ҡалыпҡа һалырға тырышҡан кешеләр ҙә әҙ түгел. Икенсе яҡтан ҡараһаң, нәсихәт эшендә был шулай булырға тейештер ҙә, үҙебеҙ хаҡында үҙебеҙ һөйләмәһәк, беҙҙең халыҡтың традицияларын, ҡанундарын үтәгеҙ, тип, уларҙы бер кем дә өндәмәйәсәк. Американдар йәки инглиздәр килеп, беҙҙең балаларҙы башҡорт мәҙәниәтен, милләтте яратырға, уның йолаларын белергә, уларға хөрмәт менән ҡарарға өйрәтмәйәсәк инде.

Беҙҙең данлыҡлы тарихыбыҙ бар. Бөйөк Ватан һуғышын ғына алайыҡ, 112-се башҡорт атлы кавалерия дивизияһы. Илгә 78 Герой биргән башҡа дивизия донъяла юҡ. Беҙ бына ошо ғорурлыҡты халҡыбыҙға еткерергә тейешбеҙ. 1696 йылда беҙҙең ырыу вәкиле Алдар батыр Азов яуында батырлыҡтар күрһәткән. Бына ошо тамырҙарҙы белеү, уларҙың батырлығы өсөн булған ғорурлыҡ ҡыйынлыҡтар булғанда, ауыр замандарҙа таяныс була, көс бирә.

Тарих ул ҡатып торған нәмә түгел. Ул ҙур фәлсәфәүи фән, тамыры ныҡ булған, бейек бер ағас шикелле. Мәғрүр үҫентенең бар япраҡтарын өйрәнеп, тикшереп, уларҙы матур итеп үҙләштергән, уның башына менеп еткән бер кеше лә юҡ, булмаясаҡ та. Кеше ошо ағас тирәләй осоп йөрөгән күбәләк кеүек кенә. Тарихты белеү йәмғиәт тәртибенең нигеҙе лә. Кешенең тышҡы ҡиәфәте аша ла шуны күҙәтергә була. Үҙ ерендә йәшәгән, быны белгән, таныған халыҡ, өркөтөлгән, ҡурҡытылған халыҡ түгел. Шуға күрә лә ул тура ҡарай, ә өркөтөлгән халыҡтың күҙе лә йүгереп тора, үҙе лә тынлыҡ белмәй, ҡайҙан килтереп һуғырҙар икән, тип ҡурҡып тора.

**▸ Ләкин тарихҡа үтә йомолоп, традицияларға артыҡ бирелеп, милли үҙенсәлектәргә ҡурҡыныс янай, тип, заман талаптарын ҡабул итмәү сигенә етеп, үҫештә артта тороп ҡалыу ҡурҡынысы ла бар түгелме?**

- Эйе, тарихты бер юҫыҡта өйрәнеп, уны бер генә йүнәлештә фараз итеп, ниндәйҙер уйҙырмалар тыуҙырып, ошо ҡанундарҙан сыҡмайыҡ әле, тип йәшәргә өндәү дөрөҫ түгел. Беҙ элек ошолай йәшәгәнбеҙ, бөгөн дә шулай уҡ йәшәргә тейешбеҙ, тип халыҡтың үҫешенә нөктә ҡуйырға мөмкин.

Минең уйлауымса, милли идея нигеҙендә лә, тәрбиә эшендә лә үҙебеҙҙең халыҡ өсөн электән булған ҡиммәттәр ятһа ла, был заман менән йәнәш атларға ҡамасауларға тейеш түгел. Балаларыбыҙҙың, йәштәребеҙҙең иң алдынғы уҡыу йорттарына уҡырға китеүен, туған телдән тыш, матур итеп инглиз, немец, француз телдәрен, башҡа мәҙәниәттәрҙе өйрәнеүҙәрен хәстәрләүҙе маҡсат итеп ҡуйыу кәрәк. Халыҡ-ара фән донъяһында беҙҙең балаларҙың исеме лә булыуы фарыз. Бөгөнгө көн ысынбарлығы шуны күрһәтә, ниндәйҙер өлкәлә алдынғылар рәтендә булыу өсөн урыҫ телен генә белеү етмәй, мотлаҡ сит ил, бигерәк тә инглиз телен белеү кәрәк. Уны белмәгән кеше - яртылаш, 50 процентҡа ғына белгес. Йәштәр менән осрашҡанда йыш ҡына, уҡыуығыҙҙың ҡалған

*Беҙҙең данлыҡлы тарихыбыҙ бар. Бөйөк Ватан һуғышын ғына алайыҡ, 112-се башҡорт атлы кавалерия дивизияһы. Илгә 78 Герой биргән башҡа дивизия донъяла юҡ. Беҙ бына ошо ғорурлыҡты халҡыбыҙға еткерергә тейешбеҙ. 1696 йылда беҙҙең ырыу вәкиле Алдар батыр Азов яуында батырлыҡтар күрһәткән. Бына ошо тамырҙарҙы белеү, уларҙың батырлығы өсөн булған ғорурлыҡ ҡыйынлыҡтар булғанда, ауыр замандарҙа таяныс була, көс бирә. Тарих ул ҡатып торған нәмә түгел. Ул ҙур фәлсәфәүи фән, тамыры ныҡ булған, бейек бер ағас шикелле. Мәғрүр үҫентенең бар япраҡтарын өйрәнеп, тикшереп, уларҙы матур итеп үҙләштергән, уның башына менеп еткән бер кеше лә юҡ, булмаясаҡ та. Кеше ошо ағас тирәләй осоп йөрөгән күбәләк кеүек кенә.*

✓ ***Музейҙа булған тарих тамыры бөтә кешеләргә лә ҡағыла. Ил етәкселәре лә тарихты матур итеп аңлап, күңеленә һеңдереп ҡайтһа, күңеле яҡшы, яҡты тәьҫораттарға тулыр ине, тип уйлайым.***



өләшән мотлаҡ инглиз телен ныҡлап өйрәнеүгә сарыф итергә тейешһегеҙ, тип әйтәм. Ниндәй генә һөнәрҙе, фән өлкәһен алма, сит илдәр менән аралашмайынса, халыҡ-ара хеҙмәттәрҙе өйрәнмәйенсә, уңышҡа өлгәшеп булмай, үҙ өлкәндәге яңылыҡтарҙан артта ҡаласаҡһың. Ә сит илгә сығып, ниндәйҙер тәжрибә алыуға бер кем дә ҡамасауламай бит. Башҡорт исемен данлау өсөн яңы мөмкинлектәр асыласаҡ. Ниндәйҙер бәләкәй сиктәрҙән сығып, яңы офоҡтарҙы асыу, халыҡ-ара бәйләнеште нығытыу - көн талабы. Беҙ уҡыусы, студент саҡта сит илдәр менән бәйләнеш әҙ ине. Ҡасандыр сиктәр асыласаҡ, тип тә уйламаныҡ. Шуға күрә, беҙҙең быуындың күптәренең сит телде белеү кимәле "һаумыһығыҙ", "һау булығыҙ", "ултырығыҙ", тип әйтеүҙән ары китмәне. Телде практикалау мөмкинлеге лә булмағандыр һыу, һауа, тәбиғәт байлыҡтары менән бәйле аңлашылмаусанлыҡтар бер дәүерҙән икенсе дәүергә, бер системанан икенсе системаға күсә. Әйтәйек, үткән быуаттың башында сәнәғәттә ҙур ҡыйынлыҡтар килеп тыуа, XIX быуаттың аҙағында, XX быуаттың башында күҙәтелгән фәнни-техник революция, сәнәғәттең йылдам үҫеүе бер мәл тотҡарлыҡҡа килтерергә тейеш була. Шулай килеп сыға ла, һәм был Беренсе Донъя һуғышы менән тамамланып ҡуя.

Бына әле донъя лидерҙары, һуғыш уты тоҡандырып, емереклектәр килтерергә, һуңынан ошо емереклектәрҙе бөтөргән сәнәғәт, иҡтисад үҫешенә яңы этәргес алырға ниәтләй. Башҡа сара юҡ, бары ошоноң менән генә проблемаларҙы хәл итеп була, тип уйлай улар. Ә бит сара бар. Күршеңә һуғыш менән янау түгел, үҙеңдә булған мөмкинлектәрҙе уға ул бер ҡасан да яҡшы нәмә булмаған, ул ҡайғы, үлем, хәсрәт. Донъя эштәрендә "тупик" тигән нәмә юҡ. Тормош кемдеңдер хаталаныуына, яңылышыуына ҡарамаҫтан, дауам итә. Аҡсаһы кеҫәһенә һыймаған кешеләр, сәйәсмәндәр, капиталдары үҫеүҙән туҡтағас, сәйәсәттәре көрсөккә терәлгәс, үҙҙәре ҡатнашмаясаҡ һуғыш усағын тоҡандырырға әҙер тора. Был уларҙың халыҡтан айырылғанын раҫлай. Кеше бит донъяға һуғышыр өсөн килмәй, ул үҙенә бирелгән ваҡытты йәшәр өсөн килә. Ҙур-ҙур проблемаларҙы хәл итеп була. Был власть бирелгән етәкселәрҙең кешелеклегенән, эстәлеге матур булыуҙан тора.

▸ **Һуңғы ваҡыттағы ҡатмарлы сәйәси ваҡиғалар, иҡтисади, социаль көрсөк арҡаһындамы, әллә башҡа сәбәптәрҙәнме, йәмғиәттә Сталин-**

кешеләр урамда эсеп йөрөй, Сталин булһа, улай йөрөргә ҡурҡырҙар ине", тип кемдәрҙер "яҡты" иҫтәлектәргә бирелә. Эйе, ил башлығы ҡорған системанан ҡурҡып, кешеләр йәмәғәт тәртибен боҙоуға бармаған замандар булған. Ләкин 40 млн. кеше репрессияланған ваҡыттар ҙа булған бит. Золом ҡорбаны булған олатайым да матур итеп йәшәргә уйлағандыр, бала, ейәндәре шатлыҡтарын татып, бәхетле йәшәргә хыялланғандыр. Бер көн килеп золом ҡорбаны булырмын, тип уйлаған микән ул? Ҡәтғи идеология, кеше икенсе төрлө йәшәп, уйлап ҡуймаһын, тип "борсолоу", һәр нәмәгә шикләнеп ҡарау, бәләкәй генә һылтау табып, кеше яҙмыштарын селпәрәмә килтереү, ошаҡ, ғәйепһеҙҙәргә ялыу яғыуҙың киң ҡолас алыуы... Ошо ысулдар, ошондай ҡулдар менән урынлаштырылған тәртиптең кәрәге бармы?

# ҒИБРӘТ, фәлсәфә



буламы? Рух, фекер азатлығының булмауы иң ҡурҡыныс нәмә. Һиңә партия программа ҡуйған, башҡаса уйлай, һөйләй, эшләй, йәшәй алмайһың. Кеше төрлө, уның мауығыуҙары, ҡыҙыҡһыныу даирәһе, зауығы бер төрлө түгел. Һин шунда эшләргә, уҡырға, йәшәргә тейешһең, тип, әҙәм балаһының үҙенең теләктәре менән иҫәпләшмәү, кешенең тормошон сикләү яҡшы түгел. Халыҡты, коллективҡа, хатта көтөүгә әйләндереп, береһен командир, ҡалғандарын тотҡон итеп, халыҡтың һөйәгендә төҙөлгән система, ниндәй генә мөһабәт күренмәһен, емерелә. Шул уҡ спираль законды ҡабатлана, Македонский империяһы, Алтын Урҙа, СССР - улар уны төҙөгән кеше һөйәктәре сереү менән ҡоланы.

▸ **Һәм һуңғы һорау. Ниндәй тарихи, йәки бөгөнгө көндә йәшәгән шәхескә үҙегеҙ етәкләгән Милли музейҙа экскурсия үткәрергә теләр инегеҙ?**

- Ун алты йылдан ашыу музейҙа эшләү дәүерендә музей экспонаттары менән дәүләтебеҙҙең беренсе кешеләрен таныштырҙым. Нарышкин, Матвиенко кеүек ҙур сәйәсмәндәргә, Медведев президент булған саҡта - уға, республиканың төрлө кимәлдәге етәкселәренә экскурсия эшләгән саҡтар булды. Быйыл ШОС, БРИКС илдәре саммиты була, ошо ойошмаларға ҡараған дәүләт башлыҡтары киләсәк. Бәлки, уларҙы ла музей менән таныштырыу форсаты тейер. Үҙем иһә, ил Президенты, Владимир Путинға шәхсән рәүештә экскурсия үткәрергә теләр инем.

Ғөмүмән, музейҙарға экскурсия эшләү ил етәкселәре өсөн файҙалы эш. Мәҫәлән, Медведевҡа Милли музейҙы гиҙгәнендә башҡорт халҡы, башҡорт һалдаттарының Парижды алыуҙағы батырлыҡтары хаҡында һөйләгәс, ошо тәьҫораттарҙан сығып, үҙ сығышын "башҡорт халҡының ошо традицияларын нисек итеп онотторһоң, беҙгә быны онотторға ярамай", тип башланы. Музейҙа булған тарих тамыры бөтә кешеләргә лә ҡағыла. Ил етәкселәре лә тарихты матур итеп аңлап, күңеленә һеңдереп ҡайтһа, күңеле яҡшы, яҡты тәьҫораттарға тулыр ине, тип уйлайым. Ул идара иткән саҡта хата яһамаҫ ине, тип уйлайым, төрлө экспонаттар аша ебәрелгән мәғлүмәт, ошо хаталарҙы башҡа ҡабатламағыҙ, тип иҫкәртер ине. Шуға ла мин тарихты белергә тырышҡан етәкселәрҙе хуплайым.

инде. Бөгөнгө көндә икмәктоҙлоҡ белем бер ниндәй гарантия ла бирмәй.

Үҙ халҡыңдың тарихын белеү күңелгә ныҡлыҡ бирә, килеп сыҡҡан ҡыйынлыҡтарҙы үтергә ярҙам итә. Тарих - ул кеше ҡараштарын формалаштырыусы нигеҙҙәрҙең береһе. Ул нигеҙҙең ныҡлығы кешегә милли сиктәрҙән сыҡмайынса ла үҫешергә ярҙам итә.

▸ **Тарихты белеү унан һабаҡ алыу өсөн дә кәрәк, тибеҙ. Кешелек тә күптән тарихтан ғибрәт алырға тейеш булғандыр. Ләкин ни өсөн кешелек бер үк хаталарҙы ваҡыт үтеү менән йәнә ҡабатлай, бер үк тырмаға ҡабаттан баҫа?**

- Был фәлсәфәүи һорау. Ысынлап та, төптән уйлап ҡараһаң, кешелектең спираль рәүешендәге үҫешен күрергә була. Тимәк, элек ҡасандыр булған ваҡиғалар ваҡыт үтеү менән, бер нисә тиҫтә йылдан, быуаттан һуң тағы ла ҡабатлана. Әлбиттә формаһын, күләмен үҙгәртә, ләкин асылын, тыуҙырған сәбәптәрен һаҡлап ҡала. Ваҡыт даирәһе ҡуласаһында элекке нөктәһен икенсе яҫылыҡта үтә. Тарихи ваҡиғаларҙы быуат-быуаттан барлап сығып, билдәләп, бер спиралгә теҙеп элеп ҡуйһаҡ, үрҙә әйткән күренеште күҙәтә алабыҙ. Эйе, йәмғиәт бер ваҡытта ла үҙ үҫешендә туҡтап тора алмай. Тарих та ваҡытҡа, тәбиғәткә бәйләнгән. Йылдар аға, ваҡыт уҙа һәм бер кешегә лә был донъяла өҫтөнлөк бирелмәгән. Шуның өсөн, ябай кешегә үҙ хаталарын ҡабатлау хас булған кеүек, йәмғиәт тә үҙ хаталарын ҡабаттан үтә. Ер,

асыу. Сөнки бөтә илдәр ҙә бер үк иҡтисади хәлдә түгел, фәҡирлек, мохтажлыҡ сигендә йәшәгән дәүләттәр ҙә бар бит әле. Ана шуларға ярҙам итеү кәрәк. Күршеләрең ҙурмы, әллә бәләкәйме, көслөмө әллә көсһөҙмө - ниндәй генә булыуына ҡарамай, уға асыҡ йөҙ менән ҡарарға, тәкәбберләнмәй хеҙмәттәшлек ептәрен нығытырға кәрәк. Әммә йәмғиәт килеп сыҡҡан проблемаларҙан иң еңел ысул ҡулланырға әҙер тора, бындай саҡтарҙа иҡтисади көрсөктө һуғыш аша хәл итергә тырыша, башы менән уйламай. Украина тирәләй башланып киткән

***Рух, фекер азатлығының булмауы иң ҡурҡыныс нәмә. Һиңә партия программа ҡуйған, башҡаса уйлай, һөйләй, эшләй, йәшәй алмайһың. Кеше төрлө, уның мауығыуҙары, ҡыҙыҡһыныу даирәһе, зауығы бер төрлө түгел. Һин шунда эшләргә, уҡырға, йәшәргә тейешһең, тип, әҙәм балаһының үҙенең теләктәре менән иҫәпләшмәү, кешенең тормошон сикләү яҡшы түгел. Халыҡты, коллективҡа, хатта көтөүгә әйләндереп, береһен командир, ҡалғандарын тотҡон итеп, халыҡтың һөйәгендә төҙөлгән система, ниндәй генә мөһабәт күренмәһен, емерелә. Шул уҡ спираль законды ҡабатлана, Македонский империяһы, Алтын Урҙа, СССР - улар уны төҙөгән кеше һөйәктәре сереү менән ҡоланы.***

ғауға арҡаһында былтыр беҙ тағы ла шундай ҙур көрсөккә килеп терәлеүебеҙгә шаһит булдыҡ. Әле булһа ла был мәсьәлә хәл ителмәгән. Ғөмүмән, кешелек ҡоралға тотонорға әҙер генә тора. Ошондай шарттарҙа ил Президенты Владимир Путинға сыҙамлыҡ теләр инем. Ил ағаларының айыҡ аҡыл менән эш итеп, донъяла булған ауыр хәлде һуғышһыҙ ғына хәл итеүгә зирәклеге етһен ине. Һуғыш

**ды һағыныу, уны күккә күтәреп маҡтау тенденцияһы күҙәтелә. Ошоға үҙ ҡарашығыҙҙы әйтеп китә алмаҫһығыҙмы?**

- Бәғзе берәүҙәрҙең " Сталин булһа, илдә тәртип булыр ине", тип һөйләнеүен ишетергә тура килә ул. Император, батшалар - проблемаларҙың хәл ителешенең нигеҙе, тип уйлау тарихты белмәүҙән, аңламауҙан килә. "Нишләп

Был хәлдәр нимәнән килеп сыҡты? Идеологиянан. Беҙҙең ҡағиҙәләргә генә ярашлы рәүештә йәшәргә тейешһегеҙ, һәр кемгә бер матрас, бер күлдәк, бер ботинка булырға тейеш, тигән ҡараштан. Аллаһы Тәғәлә һәр кешене партия идеологияһы менән түгел, ә үҙенсәлекле итеп, үҙенә генә хас есеме, булмышы менән яралтҡан. Был яҡҡа килһәгеҙ, теге яҡҡа бара алмайһығыҙ, тип кешенең ирекен сикләргә

**Шулай итеп, әңгәмәсебеҙ әйтмешләй, тарих ул - заман офоҡтарында нығытылған бер спираль кеүек. Ваҡиғалар тура-нан-тура ҡабатланмаһа ла, кешелек бер үк хаталарҙы ҡабатларға әүәҫ. Ошондай хәл килеп сыҡмаһын өсөн, тарихтан ғибрәт ала белеү ҙә мөһим. Сөнки ул - иң яҡшы остаз. Ошо остаздың кәңәштәрендә донъя өсөн именлек, үҫеш өсөн этәргес ята.**

**Азамат САЛАУАТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Бер мәл Мөслимәнең мейеһен: "Мин бит эскесегә әүерелеп барам", - тигән уй ярып үтте. Ул ошо хәлгә етеүенә шул тиклем ғәрләнде. Уға кисекмәҫтән туҡтарға, Асҡарын да шешәнән айырырға кәрәк ине. Юғиһә, икеһе лә харап буласаҡ.***




Бер мең дә туғыҙ йөҙ ҙә ҡырҡ өсөнсө йылдың май аҙағынан Асҡарҙың хәстәре бермә-бер артты. Колхоз, сәсеү эштәрен тамамлап, һабантуй ише бәләкәй генә байрам үткәрергә әҙерләнгән көндә күрше Мөхлисә апайҙы, орлоҡ игенен урлауҙа ғәйепләп, ҡулға алдылар. Ҡартайған әсәһе менән Мөслимә ҡыҙы үкһеҙ етем тороп ҡалды.

- Әсәй, ишетһен ҡолағың, колхоз икмәгенә оронаһы булма! Тамаҡты үҙем йүнләйем! Асыҡмайһығыҙ. Асыҡмаҫһығыҙ артабан да! - тине Асҡар әсәһенә, илауҙан шешенгән Мәймүнә әбей ҡайғыһын һөйләп сығып киткәс. Ҡаты итеп, ололар балаларҙы тыйған кеүек итеп әйтте. Әсәһе улына текләп һынағастай ҡатып ҡалды. Бер килке торғас, һаҡ ҡына урындыҡ ситенә сүгәләне лә, илап ебәрҙе. Улының балалыҡты ла күрмәй шулай олоғайыуы уның бәгерен телдеме, әллә яҡлаусыһы үҫеп етеүгә ҡыуанып, күңеле йомшарҙымы? Әсә кешегә ҡалай ҙа илау өсөн сәбәп бар ине.

Ошо көндән башлап Асҡар табышынан өлөштө күршеләренә лә бүлде. Мөслимә менән өләсәһен аслыҡтан ҡотҡарҙы шулай итеп.

Һуғыштан һуң, ФЗО-ны тамамлап, йүнәлтмә буйынса Сибайға, Башҡортостан баҡыр-көкөрт комбинаты төҙөлөшөнә эшкә килде. Биш йылдан һуң ул удар комсомол бригадаһы бригадиры, социалистик хеҙмәт алдынғыһы, Бөтә Союз комсомол конференцияһы делегаты һәм башҡа күп шөһрәт ҡаҙанған йәш төҙөүсе ине инде. Исеме гәзит биттәренән төшмәне. Ул етәкләгән комплекслы бригада, тәүлек әйләнәһенә сменалап эшләп, объектты нигеҙенән алып ҡыйығына тиклем бер нисә ай эсендә күтәреп ултырта ине. "Кәбиров почины" тип атанылар эште ойоштороуҙың был ысулын.

Янып эшләне, тейешле ялын да алманы. Хеҙмәт хаҡының ҡап яртыһын почта аша әсәһенә ебәреп торҙо һәм, яуап итеп, оло рәхмәт һүҙҙәре менән һуғарылған сәләм хаттары алып ҡыуанды.

Сибайҙа төпләнеүенә өс йыл үткәс кенә тыуған ауылына ҡайтып әйләнде. Йәшләй дан ҡаҙанған яҡташтарын районда ла беләләр ине. Комсомол райкомы секретары Асҡарҙы ауылына тиклем үҙ машинаһында алып барып ҡуйҙы.

Мөслимә менән дә яңынан танышыуы район үҙәгенән ауылына юлланғанда булды.

- Ултыртайыҡ һылыуҡайҙарҙы, - тине ул секретарға, юл ситенән атлаған ҡыҙҙар күренгәс.

- Әлбиттә, ултыртабыҙ. Ҡыҙҙар ҡосағында машинала ғына елдереп ҡайтып төшөү һирәктәргә тәтей. Ә һин быға достоин! - тип шаяртты хужа кеше.

Юлда сыр-сыу килеп шаян ҡыланған ҡыҙҙар, машинанан төшкәйнеләр, баҙап ҡалдылар.

- Рәхмәт, ағайҙар, - итәктәрен тартҡылап, күҙҙәрен аяҡ остарына терәп өнһөҙ ҡалған һылыуҡайҙарҙың берәүһе, араларындағы иң ҡыйыуҙарылыр, күрәһең, әйтте быны. Ул Асҡарға таныш һәм үтә лә яҡын тойолдо. Тик нисек кенә сырамытырға тырышып ҡараһа ла, ҡыҙыҡайҙы таный алманы. ФЗО-ға сығып киткәс, һирәкләп кенә ҡайтып йөрөнө. Һуңғы тапҡыр ауылында булыуына дүрт йыл да үтеп киткән шул. Ул саҡтағы үҫмер ҡыҙҙар, буй еткереп, тамылйып бешкән сейәләй күҙҙең яуын алып тора хәҙер, танырмын, тимә.

Һүҙ ҡатырға баҙнат иткән баяғы ҡыҙ күрше йортҡа боролғас: "Әллә Мөслимә булды инде", - тип ҡараштары менән оҙатып ҡуйҙы уны Асҡар. Артынса күңеле төбөнөң тәрән бер мөйөшөндә ятҡан, быға тиклем кисерелмәгән ниндәйҙер бер тойғоноң талпынып ҡуйыуына үҙе һиҫкәнгәндәй итте.

Тыуған йортонда Асҡар оло хөрмәткә сорналды. Әсәһе лә, туғандары ла уны мөкиббән китеп ҡаршы алды, күрһәткән барлыҡ изгелектәре өсөн уға сикһеҙ рәхмәт менән яна ине йөҙҙәре. Бәләкәс кенә тәпәш был йортта бынан да ҙурыраҡ ҡунаҡты ҡабул иткәндәре, ҡыуаныс кисергәндәре булмағандыр ошоға тиклем. Һуғыш йылдарында асыҡтырмаған, әле лә хәстәренән өҙмәгән улы һәм ағалары ҡайтҡан! Илленсе йылдарҙа ла аҡса күрмәгән колхозда тик улар ғына лавкаға аҡса тотоп йөрөй бит. "Асҡар улымдан алдым", - ти ғорурлыҡ менән Сәлимә һәр саҡ, аҡсаның уға ҡайҙан килеп торғанын һатыусы белһә лә. Сәлимәгә улынан ҡайһы айҙа күпме аҡса килгәне бөтә ауылға мәғлүм - почта ташыусы Хәлфетдин ҡарт ҡарсығына самауыр артында уны һүҙ араһында ғына әйтһә, ҡолағына төшкәнде үҙендә тота белмәгән әбейе шул кистә үк хәбәрҙе бөтә ауылға тарата.

Аҡсаһы ғына түгел, улының даны ла йоға Сәлимәгә. Ул хәҙер ауылда абруйлы кеше. Ауыл Советына депутат итеп һайланды, район гәзитендә "Данлыҡлы ул тәрбиәләгән әсә" тип яҙып та сыҡтылар.

Асҡар ауылда аҙна торҙо. Һәр өйгә йөрөтөп ҡунаҡ күрһәттеләр. Илле өсөнсө йылда амнистияға эләгеп аҡланған Мөслимәнең әсәһе Мөхлисә апай иң беренсе булып саҡырҙы.

- Асҡар минә улым һымаҡ. Ул әсәйем менән ҡыҙымды аслыҡтан алып ҡалды, - тип башҡаларҙы алдына сығарманы.

Шул көндән Асҡар менән Мөслимә киске уйынға бергәләп сыҡты, башҡа ваҡытта бер-береһен күрергә йән атып торҙолар. Егет кире Сибайға киткәндә вәғәҙә бирешеп айырылыштылар. Бер йыл хатлаштылар ҙа, ҡауышырға ҡарар иттеләр. Гөрләтеп комсомол туйы үткәрҙеләр, төҙөлөш тресы бөтә сығымдарҙы ла үҙ өҫтөнә алды, туй бүләге итеп фатир асҡысы тапшырҙылар. Матур башланған ғаилә тормошо, бәхетле көндәр, айҙар һәм йылдарҙан торған сәскәләр гөлләмәһендәй, балҡып, башҡаларға өлгө булып торҙо. Ике йылдан һуң Асҡарҙың бригадаһын күрше райондағы трестың күсмә колоннаһына күсерҙеләр. Райондың сиҙәмселәр ҡасабаларында төҙөлөштөң киң йәйелдерелгән осоро ине. Унда ла йәш ғаилә өс бүлмәле фатирға инде - яңы урында бер ниндәй ҡыйынлыҡһыҙ йәшәп алып киттеләр. Был ваҡытта улдары тәпәй баҫып, йүгереп йөрөй ине инде.

Асҡарҙың даны районға үҙенән дә алда килеп еткәйне. Алдынғы төҙөүсе исеменә тап төшөрмәне ул - етәкләгән бригадаһы объекттарҙы ваҡытынан алда тапшыра килде. Утыҙ биш йәшендә Асҡар Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнде, ҡырҡы тулғанда РСФСР-ҙың атҡаҙанған төҙөүсеһе исемен алды. Ғаилә тормошо ла һәүетемсә байманлыҡта дауам итте. Балалары өсәү булып китте.

Район үҙәгенә күскәс, бергә эшләгән иптәштәренең күптәре комсомол йәшенән уҙыу сәбәпле, бригаданан "удар комсомол" исеме алынды. Шул уҡ кешеләр, шул уҡ етәксе, ике ҡулға шул уҡ эш булһа ла, ҡапыл ҡарай күҙгә ташланмаған үҙгәреш тә ошо мәлдән башланды.

Бригадала Асҡарҙың абруйы бер ваҡытта ла шик аҫтына ҡуйылманы. Ул оҫта ойоштороусы һәм етәксе генә түгел, ә баһадир кәүҙәле һәм ғәйрәтле ир - ысын ҡорбашы ла ине. Шуға ла барыһы ла уны ихлас ихтирам итте, уны тыңланы, уға эйәрҙе.

Аҡсаны ҡайырып алған бригадаға эшкә төшөргә теләүселәр һәр саҡ күп булды. Йыш ҡына түрәләр ҙә туған-тыумасаһын, дуҫ-ишенең яҡындарын ҡанаты аҫтына алыуын үтенеп мөрәжәғәт итте. Ҡулынан эш килерҙәйҙәрен Асҡар алды, ә йыбытҡыларҙы, кем генә һораһа ла, бригадаға яҡын юлатманы. Шундай "блатной"ҙарҙың береһе бер саҡ үҙ "характерын" күрһәтә башланы. Уға йә ҡушҡан эш оҡшамай, йә уны башҡаларҙан артығыраҡ "егәләр", имеш. Берҙән-бер көндө ул Асҡарҙың битенән алды:

- Бында шул тиклем командывать итергә һиңә кем права биргән. Шуны эшлә, быны алып кил. Ҙур хужа табылған икән! Бик кәрәкһә, үҙең йүгер, - тип ҡушҡан йомоштан баш тартты.

- Мин бригадир, ҡустым, - тине Асҡар тыныс ҡына.

- Һин беҙҙең кеүек үк рабуший. Пошел ты, козел, йырағыраҡ, - егеттең был ҡылығына бригада шаҡ ҡатты. Бындай хәлдең булғаны юҡ ине әле. Асҡарҙы кемдер ҡайҙалыр оҙатһынсәле. Башҡа һыймаҫлыҡ, әҙәм ышанмаҫлыҡ ҡылыҡ.

Асҡар мән белмәгән әҙәмде күтәреп алды ла, көсөк балаһындай баш осонда әйләндереп, бетон түшәмәгә һалды һәм ике ҡулы менән аяҡтарынан эләктереп, өсөнсө ҡат кимәленә еткән төҙөлөп ятҡан бинаның ситенә килде:

- Мин кем, ҡустым? - тип һораны тауышын күтәрмәй генә. Бушлыҡта баш түбән һәленеп торған егет, һуғым малындай тыпырсына, үҙен белмәй аҡыра ине. -Ишетмәйем!

- Һин - бригадир, ағаа-а-ай! Ебәр зинһар өсөн, башҡа улай итмә-ә-әм, - йөҙө бурьяҡланып күкшелләнгән егет шыр ебәргәйне.

Быға тиклем гел өлгөлө, башҡаларға үрнәк бригаданың "удар комсомол" исеме менән ҡото китте, әйтерһең. Күҙҙәрҙә дәрт һүрәнләнде, ошоға тиклем янып торған осҡон саҡҡылары баҙыҡланды. Инде ҡайҙалыр ынтылырға, еңергә, үрҙәр яуларға кәрәкмәй уларға. Иртәнге һигеҙ менән киске биш арауығы нисек тә үтһә - шул яраған. Берәүҙәр бригадаға килде, икенселәр китте. Тик Асҡар ғына бер кейгән ҡамытын һалырға ашыҡманы, йөктө тарта бирҙе.

Тағы ла бер нисә йыл үтте. Инде Асҡар йышыраҡ һүҙ - өгөт-нәсихәт менән түгел, ә уҫаллыҡ менән алдырҙы, бер әйткәнде аңламағандарҙың яғаһынан ҡармап һелкетеп ҡуйыу уның ғәҙәтенә инде. Бригадала эш хаҡын элеккесә мул алдылар. Наряд кәрәгенсә ябылмаһа, ҡул ҡуйыу урынына ҡағыҙҙы мастер-прорабтарҙың битенә бәреү Асҡарға бер ни тормай ине. Улары үҙен шулай ышанысла тотҡан данлыҡлы бригадирҙан шөрләне.

Егерменсе быуаттың етмешенсе йылдарында йәмғиәтте тамам ялмап алған эскелек Асҡарҙы ла урап үтмәне. Тәүҙә тик табындарҙа һаулыҡ һәм бәхет өсөн генә рюмка күтәргән ир, тора-бара, башҡалар кеүек үк эсеүҙе йышлатты. Сәбәбе сығып торҙо. Үҙе лә теҙгенде бушатты. Баш-баштаҡлыҡҡа юл ҡуймаһа ла, кеше тормошонда була торған шатлыҡлы ваҡиғаларҙы эш урынында "йыуыу"ҙы, тыуған көндәрҙе билдәләүҙе тыймай башланы. Һый мулыраҡ булып, артыҡлап ташлаһалар, икенсе көнө эште "баш төҙәтеү"ҙән башланылар. Берҙән-бер көндө "йәшел йылан" бригаданың тулы хоҡуҡлы "ағзаһы" ине инде. Асҡар быны күрмәне лә, һиҙмәне лә.

Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденын "йыуыу" бер көндә тыйнаҡ ҡына үтеп китһә, Асҡарҙың атҡаҙанған төҙөүсе исемен алыуын бригада аҙна буйы "байрам" итте.

- Кәбировсылар теттерә, - тип ауыл халҡы бот сапты.

Илле йәшенә еткәндә Асҡар ярайһы бәҫһеҙләнгәйне. Даншөһрәте тураһында юғары трибуналарҙан түгел, эске табындарында ғына һөйләйҙәр ине ғүмеренең был дәүерендә. Буйлатып йөрөп эсте. Аҙналап эшкә сыҡмаған осраҡтары йышайҙы. Был ваҡытта ул бригадирлыҡтан да сығарылғайны.

Нәҡ ошо осорҙа Мөслимә лә шешәгә тартыла башланы. Шешәләш дуҫты урамдан эҙләп олаҡҡан ире өсөн хафаланыуҙан ялығып, өйҙә генә эсһен, тип тә үрелде тәү башлап ул рюмкаға. Ире эскәндә яфаға әүерелгән йоҡоһоҙ төндәре ҡыҙмаса булып алған ҡатынға һиҙелмәй ҙә үтә башланы. Күңелле лә үтә өҫтәүенә. Әхирәттәре менән дә ваҡыты-ваҡыты менән, сәбәп табып, берәр шешәне төпләп ҡуйыуҙы яҙыҡ күрмәне. Тора-бара Мөслимә, нимәнелер там итеп, йыш ҡына үҙенең аңлайышһыҙ болоҡһоуын тоя башланы. Асҡар ярты тотоп ҡайтһа, күңеле ирей, тормошо түңәрәкләнгәндәй була. Бер мәл Мөслимәнең мейеһен: "Мин бит эскесегә әүерелеп барам", - тигән уй ярып үтте. Ул ошо хәлгә етеүенә шул тиклем ғәрләнде, хатта йәшәгеһе килмәне. Уға кисекмәҫтән туҡтарға, Асҡарын да шешәнән айырырға кәрәк ине. Юғиһә, икеһе лә харап буласаҡ.

**(Дауамы. Башы 20-се һанда).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БОРОНҒО БАШҠОРТ КЕЙЕМДӘРЕН...

## Ишембайға барып күрегеҙ!

**Әлеге мәлдә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының XX быуат башындағы милли костюмы классик өлгө булып иҫәпләнә. "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы образы" - елән, ҡашмау кейгән, селтәр (һаҡал) таҡҡан ҡатын-ҡыҙ итеп һүрәтләнә.**

Билдәле булыуынса, XVIII быуатта аҫаба башҡорттар ҙур территорияларға эйә булған һәм был йәмғиәткә ҙур байлыҡ алып килгән. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың биҙәнеү әйберҙәре лә ошо етешлеккә тиң торған, йәғни байлыҡ уларҙың кейемендә, биҙәнеү әйберҙәрендә сағылыш тапҡан. Тағы ла шуныһы - башҡорт ата-бабаларҙың аңында матурлыҡ менән байлыҡ төшөнсәләре бер-береһенән бөтөнләй айырылмаған. Тап ошо ваҡытта крепостной Рәсәйҙең дөйөм фонында билдәле бер милләт ҡатын-ҡыҙҙарының һәр береһенең бай биҙәнеү әйберҙәре тағып йөрөүе "башҡорт һылыуы" тигән һүҙбәйләнеште барлыҡҡа килтергән, тип иҫәпләргә хаҡыбыҙ бар.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙының саф көмөштән торған биҙәүестәренең ауырлығы 16 килограмға етеүен беҙ бөгөн дә ишетеп беләбеҙ. Үкенескә күрә, бындай өлгөләр хәҙерге көндәргә тиклем һаҡланмаған. Әммә төрлө фрагменттар, ғилми баҫмалар буйынса уларҙы тергеҙеп ҡараныҡ. Был эш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Сергей Николаевич Греков ярҙамында Ишембай милли мәҙәниәттәр үҙәгенең "Юрматы" Йәмәғәт этнография музейы сиктәрендә волонтерҙар тарафынан башҡарылды. Бөгөнгө көндә "башҡорт ҡатын-ҡыҙы образы"ның ике тиҫтәгә яҡын варианты бар, бер нисә комплект "Башҡорт һылыуы" исеменә лайыҡлы. Экспонаттарҙы халыҡҡа ла күрһәттек, күптәрҙең фекеренсә, был костюмдар традицион Ислам ҡанундарына ла ҡаршы килмәй. Башҡорттар был кейемдәрҙе таный. Ул кейемдәр республикала аҫаба халыҡты танырға, ә ситтә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын башҡаларҙан айырып күрһәтергә ярҙам итә. Этнографтар тарафынан ҡабул ителгән милли кейемдәрҙе ошо костюмдар менән дә тулыландырыһаҡ ине. "Башҡорт һылыуы" силуэтын скульптура, графика, телевидение, сәхнәлә нығытып, ғилми әйләнешкә лә индерһәк ине.

**Владимир БЕССАРЕНКО.**
**"Юрматы" Йәмәғәт этнография музейы хеҙмәткәре.**


*"Тархан ҡыҙы". Модель: Л. Әхмәтйәнова*


*"Тархан ҡатыны". Модель: М. Өмөтбаева*


*"Бай ҡатыны (байрам хужабикәһе)". Модель: Ф. Усманова*


*"Ырыу башлығы ҡатыны". Модель: З. Алламоратова*

ШАҒИР ҺҮҘЕ

*Ҡамса МОРТАЗИН*

### Башҡортостан

Башҡортостан! Күпме йыр бар икән
Ғорур һынлы һинең исемгә!
Һинең данлы юлың, көс-ғәйрәтең,
Үлгәндә лә сыҡмаҫ иҫемдән.

Ирәмәлем, мәғрүр Янғантауым
Олпатланған күпте күреүҙән.
Армыт-армыт ята һыртлауҙарың,
Затлы мәрйен кеүек теҙелгән.

Ҡояш нурҙарында гәлсәр кеүек
Урғып аға шишмә һыуҙарың.
Шул һыуҙарҙы эсеп үҫкәнгә бит
Батыр улдар, матур ҡыҙҙарың.

Арыш баҫыуҙарың йәшел бәрхәт,
Ҡот-бәрәкәт бында һибелгән.
Бал ҡорттары кеүек башҡорттарым,
"Икмәк!" тиеп, ергә эйелгән.

Әй, Уралым, һинең күкрәгеңдә
Сал быуаттар һалған эҙҙәр бар.
Һине данлап, халҡым йөрәгендә
Бөтмәй генә торған йырҙар бар.

### Ҡарағайҙар

Ҡарағайҙар төҫ ташламай
Ҡыштарын тын торалар.
Гүйә, улар хаҡ мосолман,
Сабыр кәңәш ҡоралар.

Бурандарҙа башҡайҙарын,
Йөҙҙәрен йәшермәйҙәр.
Йәйге селләлә ныҡылмай,
Ҡояштан йәшенмәйҙәр.

Яҙмыштары - ҡаяларҙа,
Һығыла ҡайырҙары...
Урал ташына ереккән
Ҡарағай тамырҙары.

### Силәбеләр

Силәбеләр, тиҙәр, беҙҙе,
Ситтәр тип әйткеләйҙәр.
Уртабайҙар тимәгеҙ һеҙ,
Беҙ - түгел әпкәләйҙәр.

Беҙгә Рәсәй - үгәй әсәй,
Атайсал - сал Урал тау.
Яҙмыш беҙҙе айырһа ла,
Илгенәйем имен-һау.

Уралымды он-талҡанға
Әйләндереп ҡуймағыҙ.
Үгәйҙәр, тип, Еребеҙҙән
Затыбыҙҙы юймағыҙ!

Силәбеләр, тиҙәр, беҙҙе,
Кемдәргә ситтәгеләр?
Уралтауға ереккәнбеҙ,
Беҙ - ғорур силәбеләр!

### Уралтау

Күпме тапҡыр ҡар ҡаплаған
Олпат башын Уралдың.
Күпме тапҡыр түбәһендә
Ҡара һөрөм уралды.

Теҙ сүкмәгән баһадирҙай
Башын терәп күктәргә,
Урал тора дауылдарҙа
Терәк булып күптәргә.

Ер шарының уртаһында,
Ҡупмаһын, тип, ҡабат яу,
Донъяларҙың именлеген
Һаҡлап тора Уралтау.

### Һиңә генә...

Күңелемдә һиңә әйтелгәндән
Әйтелмәгән һүҙҙәр күберәк.
Янартауҙың ҡайнар ялҡынындай
Тойғоларым ята төптәрәк.

Дауҙа һаҡла һуңғы һүҙен, тиҙәр,
Яуҙа - һаҡла һуңғы уғыңды.
Абай яугир кеүек, тоғро ҡалып,
Дауам итәм ғүмер юлымды.

Әйтелмәгән серле һүҙҙәремде
Һуңғы уҡтай итеп йөрөтһәм,
Ғәйепләмә, ҡайнар хистәремде
Йөрәгемдә генә йөртәм.

✓ *Был һуғыштан һуң атайыма "Берлинды алған өсөн" миҙалы бирелә. Һуғыштан һуң атайым тыуған колхозында эшләне, "Почет билдәһе" ордены һәм "Өлгөлө хеҙмәте өсөн" миҙалы менән билдәләнде хеҙмәте.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КИСКЕ АЛТЫНАН ҺУҢ...
## эшләмәгеҙ

■ Организмға йод етешмәү арыуҙың сәбәбе була ала. Ғәҙәттә, яҙ һәм йәй миҙгелдәрендә энергия дефициты булырға тейеш түгел һымаҡ, шулай ҙа бындай күңелһеҙлек килеп тыуған икән, тукланыу режимына иғтибар итегеҙ, ти белгестәр. Әгәр ҙә тиҙ арыйһығыҙ, һалҡын тейеп бара, сәстәрегеҙ ҡойола, тирегеҙ кибә икән, етмәһә, хәтер насарайып, ишетеү һәләте түбәнәйһә, йөрәк тибеше боҙолһа, организмға йод етешмәүе ихтимал. Йод диңгеҙ кәбестәһендә, балыҡ һәм диңгеҙ ризыҡтарында күп. Йодлы тоҙҙы ла ҡулланырға була, әммә тоҙҙо оҙаҡ һаҡлаһаң, йодтың күпселек өлөшө юҡҡа сыға, сөнки йод - осоусан берләшмә.

■ Ғалимдар мәктәп парталарын бейек өҫтәлдәргә алыштырырға тәҡдим итә. Бындай өҫтәл артында балалар ултыра ла, баҫып та тора алаҡаҡ. Техастағы A&M университетының Сәләмәтлек ғилми үҙәге белгестәре тикшеренеүҙән үткәргән. Уҡыу йылы дауамында балаларҙың һорауҙарға яуап биреүе, дискуссияларҙа әүҙем ҡатнашыуы баһаланған. Һөҙөмтәлә, баҫып торған саҡта баланың иғтибары 12 процентҡа юғарыраҡ булыуы асыҡланған. Яңыраҡ ғалимдар дәрестә баҫып тороуҙың артыҡ ауырлыҡтан ҡотҡарыуы тураһында белдергәйне. Шуға ла белгестәрҙең был яңылығы бер кемде лә аптырауға һалмаған. Физик әүҙемлектең саҡ ҡына күтәрелеүе лә когнитив һәләттәргә ыңғай йоғонто яһай, тип белдерә ғалимдар.

■ Халыҡ-ара ғалимдар төркөмө лидерлыҡ сифаттары менән бәйле ДНК молекулаһын асыҡлаған. Йышыраҡ осраҡта, лидерлыҡҡа ынтылыу нәҫелдән күсә икән. Ғалимдар 4 мең кешенең эшенә, үҙен уратып алған кешеләргә мөнәсәбәтен генетик яҡтан тикшереп, лидерлыҡ һәләтен күрһәтеү тенденцияһы менән rs4950 генотибы бәйле булыуы билдәләнгән. Әммә ғалимдар үткәргән тәжрибәләр күрһәтеүенсә, генетика ыңғай тышҡы мөхит тәьҫире менән берләшкәндә генә кеше уңышлы лидер булып китә ала. Тыумыштан кемгәләр лидер позицияһына сығыу һәм унда нығыныу мөмкинлеге бөтөнләй бирелмәһә лә, лидерлыҡ сифатының бер өлөшөн тәрбиәләп була, ти ғалимдар.

■ Организм дөрөҫ эшләһен өсөн көн тәртибе лә мөһим роль уйнай. Дөрөҫ тукланыу, йоҡо һәм ялға етерлек ваҡыт бүлеү, витамин һәм микроэлементтарҙың запасын тулыландырып тороу - быларҙың барыһы ла һеҙҙең тормошоғоҙҙа мотлаҡ булырға тейеш. Быларҙан тыш, ҡайһы бер ябай ҡағиҙәләрҙе үтәү кәрәк. Иртән тиҙ уяныуҙы ғәҙәт итеп алығыҙ, уянғас та оҙаҡ ятмай, душҡа барығыҙ, физик күнекмәләр эшләгеҙ. Көндөҙ организм күпкә әүҙемерәк, шулай ҙа сәғәт берҙәрҙә ял итеп алыу ҡамасауламаҫ. Мөһим эштәрҙе киске алтынан һуңға ҡалдырырға ярамай.

■ Америка тикшеренеүселәре раҫлауынса, артыҡ ауырлыҡ, аныҡыраҡ әйткәндә, билдәге һәм аяҡтағы артыҡ майҙар насар йоҡлауҙың сәбәбе булыуы ихтимал. Джон Хопкинс университеты ғалимдары II типтағы шәкәр диабеты менән яфаланған һәм был ауырыу барлыҡҡа килеү хәүефе төркөмөндәге 77 кешене тикшереп ҡараған. Беренсе төркөм диетаға ултырған һәм физкультура менән шөғөлләнә башлаған. Икенсе төркөм диета менән генә сикләнгән. Ике төркөмдәге кешеләр дөйөм иҫәпләгәндә ете килограмға ябыҡҡан. Шул уҡ ваҡытта, был һынауҙа ҡатнашыусыларҙың 20 проценты йоҡолары яҡшырыуы тураһында белдергән. Ғалимдар әйтеүенсә, һимеҙ кешеләрҙә апноэ - йоҡлаған саҡта ҡыҫҡа ваҡытҡа тын алыу туҡталып тороуы йыш осрай. Апноэ менән яфаланыусыларҙа йөрәк һәм баш мейеһе ҡан тамырҙары проблемаһы ла була, сөнки мейегә кислород һәм файҙалы матдәләр етешмәй. Кеше ябығыу менән быларҙың барыһы ла юҡҡа сыға һәм ул яҡшыраҡ йоҡлай башлай.

ХӘТЕРКИТАП

# ҠАРА БАТЫР



**Илебеҙ 70 йыл тыныс йәшәй, был уртаса кеше ғүмеренә тиң ара. Үҙем дә, хаҡлы ялда булһам да, һуғышты китаптарҙан уҡып, киноларҙан күреп кенә фекер йөрөтәм. Әммә миңә һуғышта ҡатнашҡан, тән, йән яраһы алған олпат ағайҙар, апайҙар менән ҡулға-ҡул тотоношоп эшләргә лә тура килде, уларҙан фәһемле кәңәштәр алырға, эш тәжрибәләренә төшөнөргә лә мөмкинлектәр булды.**

1975 йыл ҡоролоҡ, аслыҡ йылы булып күптәрҙең хәтерендә ҡалғандыр. Был йылда мин Башҡорт ауыл хужалығы институтын тамамлап, Йылайыр районы ауыл хужалығы идараһына үҫемлектәр һаҡлау станцияһы етәксеһе булып ҡайттым. Эш әллә ни күңелгә ятмай, институтта алған белемде практикала ҡулланып ҡарағы килә. Шул осорҙағы осраҡлы осрашыу минең хыялымды тормошҡа ашырҙы. 1976 йылдың февралендә Сибай тимер юл станцияһында Баймаҡ районы Советы башҡарма комитеты рәйесе Әмир Закир улы Сәйғәфәров менән таныштыҡ. Мин уға теләгемде белдерҙем, ул минә өс колхозда урын барлығын әйтеп, шуларҙың береһен һайларға тәҡдим итте.

Бына шулай "Һаҡмар" колхозына килеп төштөм. Колхоз идараһы Йомаш ауылы клубының икенсе ҡатында урынлашҡайны. Колхоз рәйесе Айса Солтан улы Байегетовты халыҡ ни өсөн "Ҡара батыр" тип йөрөтөүен дә өс көндә үк аңланым. Ҡаты һөйләшеүе, үткер ҡарашы, ҡарағусҡыл киң йөҙө уны үҙ-үҙенә ышанған, көслө ихтыярлы кеше итеп күрһәтһә, үтә лә талапсан булыуы үҙ бурыстарына яуаплы ҡараған, белемле, абруйлы етәксе булыуы тураһында һөйләй ине. Киң яурындары, ҡалын кәүҙәһе, һәлмәк итеп баҫып атлап китеүе әкиәттәге батырҙы хәтерләтә ине шул. Ул ваҡытта уға 50 йәш кенә булған, донъяның михнәтен күп күргәнгәме, ул ярайһы өлкән тойола ине.

1925 йылда Баймаҡ районының Йомаш ауылында тыуа ул. Атаһы Солтанәхмәтте колхоздан Баймаҡ баҡыр иретеү комбинатына эшкә ебәрәләр, ул аҙаҡтан ғаиләһен дә Баймаҡҡа күсерә. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас та, ул фронтҡа китә һәм 1942 йылда Сталинградта һәләк була. Атаһы һуғышҡа киткәс, Айса уҡыуын ташлап, атаһы эшләгән атлылар паркында йөк ташыусы булып эш башлай. 16 йәшлек егет ике ат менән руда ташый. 1943 йылдың февралендә уның үҙен дә Совет Армияһы сафына алалар. Полк мәктәбендә кесе командирҙар курсын тамамлағас, өлкән сержант званиеһында взвод

ЕҢЕҮСЕЛӘР ХӘТИРӘҺЕ

# БЕРЛИНҒАСА БАРЫП ЕТКӘН...



**Атайым Мөхәмәтйән Низаметдин улы Динисламов 1905 йылда Ҡырмыҫҡалы районында тыуған. Мәктәптә белем алырға тура килмәй уға, өйҙә ғәрәп, латин графикаһын үҙ аллы өйрәнә. 1925 йылда уны ярлылар комитеты рәйесе итеп һайлайҙар. Өфөгә барып, комвуз тамамлай, аҙаҡтан халыҡ араһында политинформациялар үткәрә, революция темаһына яҙылған спектаклдәрҙә уйнай, ҡурайсы һәм йырсы була.**

1930 йылда районда беренсе булып колхоз ойоштора. Уға "Ҡыҙыл туғай" тигән исем бирелә. Уның беренсе рәйесе була. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, атайымды беренселәрҙән булып фронтҡа алмайҙар, 1942 йылдың аҙағына тиклем бронь бирәләр. Һуғышҡа ошо йылдың аҙағында ғына китә һәм Украина фронтына эләгә.

Беренсе хәрби наградаһы - "Ҡаһарманлыҡ өсөн" миҙалын атайым көҙгө һыуыҡ көндә Днестр йылғаһын йөҙөп сығып, ҡаршы яҡ ярҙа урынлашҡан полк менән бәйләнеш булдырғаны өсөн ала. Батырлыҡ күрһәткән өсөн бирелгән икенсе миҙалды уға партизандар отряды менән бәйләнеш булдырған өсөн бирәләр. Ошо разведкаһы тураһында атайым шулай тип һөйләй торғайны: "Партизандарҙы эҙләп, бер ауылға барып сыҡтым. Ауыл осонда урынлашҡан өйгә барып инһәм, хужабикәнең ҡото осто, сөнки был украин ҡатынының өйөндә немец һалдаттары фатирҙа тора икән. Ул мине тиҙ генә сығарып ебәрә һалды. Емерек һарайҙа серем итеп алғас, тағы партизандарҙы эҙләй башланым. Урманға етәрәк, егермеләп кешенән торған төркөм осраны. Төркөм башында йылы тун, бүрек кейгән, битендә бысаҡ яраһы эҙе ҡалған кеше, ҡалғандары беҙҙең һалдаттар ине. Төркөм башлығы партизандар отрядына китеп барыуҙарын белдереп, мине лә үҙҙәре менән саҡырҙы. Уларға ҡушылһам да, шунда уҡ күңелемә шик төштө, сөнки төркөм башындағы әҙәм һалдаттарҙы урмандың ҡырынан ғына алып бара, ә был юл партизандарға алып барғанға оҡшамаған. Һуҡмаҡ боролған ерҙә ҡапыл ғына юл ситенә йығылып, ятып ҡалдым, бер кем һиҙмәне. Аяҡ тауыштары тынғас, ағас араһынан ҡарап торҙом: ҡыуаҡ ситенә килеп сығыуҙары булды, төркөмдө немецтар уратып та алды. Ә теге тун кейгән кеше дошмандар менән нимәләр һөйләште лә, ашыҡмай ғына ауылға ҡарай юл тотто. Был немецтарға хеҙмәт итеүсе полицай булып сыҡты. Аҙаҡ мин ошо һатлыҡ йәнде Өфөлә осраттым..." Атайым уны туҡтатырға тырышты, ә ул кешеләр араһына ҡасты. Ул мәлдә мин дә атайым эргәһендә инем.

Атайым пехота составында Берлинғаса барып етә. Был һуғышта һалдат дуҫлығы еңде, тиһәң дә хата булмаҫ, ти торғайны ул. "1945 йылдың май башынан 9 майға тиклем һуғыштар Берлин эсендә барҙы, - тип хәтерләй ине ул ваҡиғаларҙы. - Иптәштәремдең күбеһе ошонда башын һалды, сөнки һәр нығытманан, тәҙрәнән, балкондан дошман беҙҙең өҫкә ут ямғыры һибә ине. Берлин ҡалаһында йәшәгән ябай кешеләр өсөн бик ауыр ваҡыт булды ул осор. Һуғыштың аҙаҡҡы көндәрендә беҙҙең ашнаҡсы бешергән аш-һыу тирәһенә хәлһеҙләнгән немец балалары йыйыла ине. Уларға ла өлөш сығара инек, икмәк һындыҡтарын тотоп, балалар подвал тәҙрәләренән ҡарап торған әсәләренә табан йүгерәләр. Беҙ был ваҡытта фашистарҙың беҙҙең граждандарға һәм балаларға ҡылған яуызлыҡтары тураһында онота торғайныҡ. Бына шулай ике армия - ике идеология ине..."

Был һуғыштан һуң атайыма "Берлинды алған өсөн" миҙалы бирелә. Һуғыштан һуң атайым тыуған колхозында эшләне, "Почет билдәһе" ордены һәм "Өлгөлө хеҙмәте өсөн" миҙалы менән билдәләнде хеҙмәте. Ул һуңғы һулышына тиклем партияға фанатик рәүештә ышанып йәшәне. Һуғышта еңеү яулап ҡайтҡан һәр һалдатҡа ла ошо тойғо хас булғандыр, тип уйлайым.

**Зинәйҙә ДИНИСЛАМОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

✓ *Тәрбиәле кеше халыҡ күп булған урында үҙенең ғаилә хәле, эштәге мөнәсәбәттәре хаҡында, балалары, хәл итәһе мәсьәләләре тураһында һөйләмәй.*



командиры ярҙамсыһы итеп фронтҡа оҙаталар. Беренсе Белорус фронты генерал Чуйков етәкселегендә Белоруссияны, Украинаны, Польшаны азат итеүҙә ҡатнаша. Хәрби батырлыҡтары "I дәрәжә Ватан һуғышы" ордены, "Батырлыҡ өсөн", "Германияны еңгән өсөн" миҙалдары менән билдәләнә. Енеүҙе Эльба йылғаһы ярында ҡаршы ала. Һуғыш осоронда өс тапҡыр яралана. 1945 йылдың аҙағында тыуған яғына ҡайта һәм үҙе эшләгән Баймаҡ баҡыр иретеү комбинатында торф склады бригадиры, ҡараул начальнигы, янғын-хәрби һаҡ етәксеһе урынбаҫары булып эшләй. Бер үк ваҡытта киске мәктәптә уҡый, урта белем ала. 1952 йылда уны Баймаҡ район комитетына инструктор итеп тәғәйенләйҙәр һәм 1954 йылда Өфө юғары партия мәктәбенә уҡырға ебәрәләр. Унан "Йылайыр" сиҙәм совхозына партия комитеты секретары булып эшкә ҡайта. 1959 йылда "Һәүәнәк" һөтсөлөк совхозына директор вазифаһына тәғәйенләнә. Унан һуң "Йылайыр" совхозының үҙәк бүлексәһе управляющийы булып эшләй, 1968 йылда тыуған колхозына рәйес булып ҡайта.

Бына шундай тормош мәктәбен үткән яугир, оҫта етәксе, талантлы оратор Айса Солтан улы менән күп йылдар эшләргә тура килде. Ул минең тәүге етәксем, ауыл хужалығы тармағында эшләргә өйрәтеүсе тәүге уҡытыусым да булды. Быйыл уға 90 йәш тулған булыр ине, әммә ул 65 йәше лә тулмайынса, баҡыйлыҡҡа күсте. Ул заманда бергә эшләгән күптәр юҡ инде хәҙер, хатта данлыҡлы "Һаҡмар" совхозын да ҡара ергә тереләй "күмеп" ҡуйҙыҡ. Хәҙер Йомаш, Юлыҡ ауылдарына барһаң, элекке кеүек трактор, машина тауыштары ла ишетелмәй, баҫыуҙа иген дә үҫмәй. Элекке колхозсы ағайҙарҙың да йөҙөндә йылмайыу юҡ.

Һуғыштан һуң колхозды аяҡҡа баҫтырыуы күпме тырышлыҡ талап иткәндер, ай-һай. Айса Солтан улы етәкселек иткәндә хужалыҡ бигерәк йылдам үҫә. 1976 йылда иген культураларынан гектарынан уртаса 22,9 центнер уңыш алып, районда икенсе урын яуланыҡ. Башҡа йылдарҙа ла беҙҙең механизаторҙар ал бирмәне, ике йыл буйына Ленинград өлкәһенә өсәр вагон вика орлого һатыу быға дәлил. Колхоздың мөгәҙлө эре малдары өс мендән ашып китте, һауын һыйырҙары ғына 720 баш ине. Тоҡом таналары үҫтереү буйынса йүнәлеш алғас, Айса Солтан улы Омск өлкәһенә барып, уларҙың тәжрибәһен өйрәнеп ҡайтты. Шул мәлдә төҙөлгән һарайҙы халыҡ "Омск һарайы" тип йөрөттө. Мал күбәйгәс, һуғарыулы көтөүлектәр, бесәнлектәр булдырылды, витаминлы үлән етештереү агрегаты ҡоролдо. Был цех эшләй башлағас, ауыл, ферма, юл буйҙарындағы ҡый үләндәрен сабып ташыу эше юлға һалынды, ауыл тирәһе таҙарып ҡала ине. Ә күпме яңы төҙөлөштәр тормошҡа ашырылды! 1988-1989 йылдарҙа "Һаҡмар" колхозы миллионер хужалыҡтар иҫәбенә инде, был уңыш та Айса Солтан улының хужалыҡҡа һалһы нигеҙ ташы һалыуынан ине. Айса Солтан улын 1973 йыл йомғаҡтары буйынса "Почет билдәһе" ордены, 1976 йылда "Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ" ордены, 1980 йылда "Октябрь Революцияһы" ордены менән наградлайҙар. Хәйер, был шәхес тураһында күп яҙырға булыр ине, эшләгән эштәре һанап бөткөһөҙ, әйткән фәһемле һүҙҙәре әле лә ҡолаҡта сыңлап тора. Тап шундай кешеләр арҡаһында фашизмды тармар иткәндәр, һуғыштан һуң емерелгән, бөлгән илде ҡыҫҡа ваҡыт эсендә аяҡҡа баҫтырғандар. Беҙ, һуғыштан һуң тыуған балалар, үткән тарихты оноторға, уға енел ҡарарға тейеш түгелбеҙ.

**Шәғәйеп УСМАНОВ,**
**ауыл хужалығы фәндәре кандидаты.**
**Сибай ҡалаһы.**

ЭТИКЕТ

# ҠЫЛЫҠТАРЫҢДА - ТӨҘӘТМӘ,

## йәғни аралашыу этикаһы тураһында

**Кеше бер көн дә аралашмайынса йәшәй алмай. Йәмғиәттә ҡабул ителгән ҡанундар беҙҙе төрлө кешеләр менән төрлө темаларға аралашыуға этәрә. Яҡындарың, ғаилә ағзалары менән аралашҡанда тема һайлау мәсьәләһе тормай, ә башҡа йәмғиәт урындарында нимә хаҡында һәм нисек һөйләшергә? Һүҙҙе нисек башларға, үҙеңде нисек тоторға һәм ниндәй темаларға бөтөнләй ҡағылмаҫҡа? Түбәндә - ошо хаҡта.**

● Яңы танышыуығыҙ менән әңгәмәне һауа торошо тураһында башлау иң ҡулайлыһы булыр. Был тема, ғөмүмән, әңгәмә башлау сығанағы булып тора тиһәң дә хата булмаҫ. Хатта етди һөйләшеүҙе лә һауа торошо тураһындағы мәғлүмәттәрҙе барлауҙан башлаһаң, һөҙөмтә уңышлыраҡ була, тигән фекергә килгәндәр ошо өлкәлә тәжрибә үткәреүселәр.

● Күптән түгел генә танышҡан кеше менән аралашҡанда үҙегеҙҙең шәхси проблемаларығыҙ тураһында һөйләмәгеҙ һәм уны ла ошо йүнәлешкә ебәрмәгеҙ. Ғөмүмән, үҙегеҙ тураһындағы мәғлүмәтте һәр кемгә, бигерәк тә яҡшы белмәгән кешегә, асып һалыуҙан һаҡланығыҙ.

● Һөйләшеүҙе ҡабаланмай ғына, әңгәмәләшегеҙҙең кәйеф-торошон күҙ уңынан ысҡындырмайынса башлап ебәрегеҙ. Әңгәмә барышында бәхәс сыҡһа, үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы объектив факттарға таянып ҡына дәлилләгеҙ, әңгәмәләшегеҙгә ауыр, мыҫҡыллы һүҙҙәр әйтеүҙән тыйылығыҙ, тауыш күтәрмәгеҙ, уның һүҙҙәренән көлмәгеҙ. Юғары һәм мыҫҡыллы тон бер ҡасан да бәхәстә аргумент ролен үтәмәй, шуға күрә бындай ҡылығығыҙ менән үҙегеҙҙе көлкө хәлгә ҡалдырыуығыҙ ихтимал.

● Тәрбиәле кеше халыҡ күп булған урында үҙенең ғаилә хәле, эштәге мөнәсәбәттәре хаҡында, балалары, хәл итәһе мәсьәләләре тураһында һөйләмәй. Ҡайһы берәүҙәр үҙенең иртән торғас нимә эшләгәненән башлап әлеге минутҡа тиклем ни менән шөғөлләнгәне хаҡындағы мәғлүмәт менән бүлешә. Был - мәғәнәһеҙлек һәм уны йәмләмәй. Ә башҡаларҙың эшенә ҡыҫылған һәм улар тураһында яу һалып һөйләп йөрөүселәр ғәйбәтселәр исемлегенең тәүге баҫҡысында тора. Ошондай түбәнселеккә төшөүҙән һаҡланығыҙ. Әгәр ҙә кемдер һеҙгә икенсе берәүҙең тормошо хаҡында фекер алырға саҡырһа, уның был аҙымын шунда уҡ туҡтатыу сараһын күрегеҙ. Ә кемдәндер һеҙҙең турала һөйләүен ишетеп ҡалһағыҙ, бөтөнләй әһәмиәт бирмәгеҙ һәм уларға ниндәйҙер аңлатмалар биреп ваҡытығыҙҙы бушҡа әрәм итмәгеҙ.

● Дөйөм таныштарҙың йөҙ-ҡиәфәте, кейем-һалымы, йорто тураһында әңгәмә алып барыу ҙа бер кемде лә биҙәмәй.

● Күп кешенән торған компанияла кемгәләр аңлашылмаған темаларҙы күтәреүҙән тыйылығыҙ.

● Урынлы-урынһыҙ көләмәс һөйләү, әңгәмәләште бүлдереү - тәрбиәһеҙлек күрһәткесе. Бигерәк тә оло кеше менән аралашҡанда бик һаҡ һәм иғтибарлы булыу талап ителә. Шулай уҡ икенсе кеше өсөн уның әйтергә теләгәнен һөйләп бөтөргә яратыусылар йыш осрай. Үҙегеҙҙе уның урынына ҡуйып ҡарағыҙ - һеҙгә ошондай мөнәсәбәт күрһәтһәләр, икенсе тапҡыр ул кеше менән аралашырһығыҙмы? Икеле.

● Ят балаларҙы ата-әсәһе алдында тәнҡитләү, нимәләр өйрәтеү, тәрбиәһеҙлектә ғәйепләү бик тә йәмһеҙ күренеш.

● Әңгәмә барышында, һүҙ араһында ғына, берәйһе үҙен насар тойоуы хаҡында белдерһә, уға төрлө һорауҙар биреп ябырылмағыҙ һәм башҡаларҙың иғтибарын йәлеп итмәгеҙ.

● Сәстең яңы төҫө тураһында сал сәстәрен буямаған ҡатын-ҡыҙ менән генә әңгәмә ҡорорға була.

● Оло йәштәге кеше янында "Бындай оло йәштә", берәйһе тураһында "Ул ҡартайған инде" тигән һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙан тыйылығыҙ. Ғөмүмән, яҡшы таныш булмаған кешенең һәм ололарҙың йәше менән ҡыҙыҡһыныу насар тон.

● Әңгәмәсегеҙҙән уның эш урыны, етәксеһе, коллегалары тураһында тулы мәғлүмәт таптырыу һәм айырыуса күпме эш хаҡы алыуы хаҡында һорау этика ҡағиҙәләренә тура килмәй.

● Байрам табынан берәйһе, кисектергеһеҙ эше булыуына һылтанып, иртәрәк ҡуҙғалһа, уны көс менән туҡтатырға тырышмағыҙ, ниндәй эше булыуы тураһында һорауҙар биреп йонсотмағыҙ.

● Бөтәһенә лә ишетерлек итеп үҙ-үҙегеҙҙе битәрләүҙән, йәлләүҙән, уңышһыҙлыҡтарға осрауҙан арыуығыҙ тураһында һөйләүҙән тыйылығыҙ, сөнки был бик йәмһеҙ күренеш. Шул уҡ ваҡытта бер туҡтамай үҙенең уңыштары, яулаған үрҙәре тураһында ҡысҡырып йөрөүсене лә йәмғиәт хөрмәт итмәй.

● Йор һүҙле булып күренеү теләген алға ҡуйып, кешенең буйына, комплекцияһына, исем-шәрифенә, төҫ-башына, милләтенә, йәшәгән урынына, белеменә ҡарата шаяртыуҙар ҡулланыу ҡәтғи тыйыла. Шуны ла иҫтә тотоғоҙ - дүртенсе тапҡыр ҡабатланған шаярыу бар күркәмлеген юғалта.

● Күп һөйләүгә ҡарағанда, матур итеп тыңлай белеү күпкә матурыраҡ тәьҫораттар ҡалдыра.

● Кеше һөйләгәндә сумкала нимәләр эҙләү, кеҫәләрҙе аҡтарыу, тирә-яҡҡа ҡараныу, күҙгегә йәки телевизорға текләп тороу матур күренеш түгел. Һөйләгән кешегә тура ҡарап, уның һүҙҙәре ҡыҙыҡ икәнлеген күрһәтеү һеҙҙең турала һәйбәт әңгәмәләш тигән фекер ҡалдырасаҡ.

●Осраҡлы рәүештә ниндәйҙер хәбәр ишетһәгеҙ, уны шунда уҡ онотоғоҙ. Был мәғлүмәт тураһында һөйләп йөрөмәгеҙ.

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Уңышлы булыуҙың бөйөк сере

### 2-се бизнес-модель. Мәғлүмәт өлкәһендәге эшҡыуарлыҡ

Ысын интернет-магнат булырға, өйҙә йәки Париждағы урам кафеһында эшләргә, Гавай утрауҙарында пальма аҫтында күләгәлә генә ултырып ноутбуктан реклама хәбәрҙәре ебәрергә теләйһегеҙме? Популяр автор булып, китаптарығыҙға автограф ҡуйып уҡыусыларға таратырға, CD, DVD, махсус репортаждар тупланмаһы һәм һанлы форматтағы продукция ресурстары китапханаһына эйә булырға хыялланаһығыҙмы? Ҡасандыр оҫта оратор булып, тотош донъя буйлап семинарҙар үткәреп йөрөүегеҙҙе күҙаллайһығыҙмы?

Әгәр ошо һорауҙарҙың береһенә генә булһа ла "эйе" тип яуап биргәнһегеҙ икән, тимәк, һеҙгә мәғлүмәт өлкәһендәге эшҡыуарлыҡ оҡшай. Был бик мауыҡтырғыс өлкә, ул күптән түгел барлыҡҡа килә һәм интернет селтәре мөмкинлектәре арҡаһында потенциаль клиенттар менән аралашыуҙың һәм эште ойоштороуҙың яңы алымдарын тәҡдим итеп, сикһеҙ мөмкинлеккә эйә. Һеҙҙең эшегеҙ - үҙегеҙҙә булған мәғлүмәтте, тәжрибәне, оҫталыҡты һатыу.

Был бизнес моделе:

"Комаҡ йүгереүҙәренән" ғарыҡ булған һәм үҙенең өйҙәге интернет-бизнесын асырға хыялланған кешеләр;

барлыҡ мәғлүмәтте китаптарына һалып, уларҙы 20 долларға ғына һатып байып булмауҙы аңлаған яҙыусылар;

көн һайын яңы аудитория эҙләүгә нигеҙләнгән өмөтһөҙ бизнес-моделдә "батҡан" профессиональ ораторҙар;

үҙ белемдәре менән күрәп аҡса алырға хыялланған компьютер генийҙары;

"Ваҡытымды аҡсаға һатам" тигән ҡапҡанға эләккән консультанттар өсөн яҡшы.

Әлбиттә, һеҙ был төркөмдәрҙең мотлаҡ береһендә булырға тейеш түгелһегеҙ, әммә ниндәйҙер өлкәлә етерлек мәғлүмәтле булып, шуның ярҙамында аҡса эшләргә теләйһегеҙҙер. Иң мөһиме - башҡалар түләргә әҙер булған белем һәм тәжрибәгә эйә булыу.

Мин һеҙҙе тағы бер тапҡыр иҫкәртергә теләйем: бында төп һүҙ булып ***башҡалар түләргә әҙер булған,*** тигән һүҙ тора. Эш аҡса эшләүгә ҡағыла икән, ғилми академик белем ғәмәлдә ҡиммәтен юғалта. Карибу боландарының миграцияһы буйынса Ер шарында иң билдәле эксперт булыуығыҙ ҡояшты ҡаплайҙыр, бәлки, әммә һеҙгә коммерция тамыры булған ярҙамсы кәрәк.

Әгәр аҡса эшләргә теләһәгеҙ, мәғлүмәтегеҙ аныҡ нәмәләргә бәйле булырға тейеш. Кешеләр уларҙы карьера үҫеше, ғаилә мөнәсәбәттәрен камиллаштырыу, яңы оҫталыҡтарын үҫтереү, йорт хайуандарын ҡулға эйәләштереү, балаларҙы һөҙөмтәлерәк тәрбиәләү йәки ниндәй ҙә булһа файҙа алыу өсөн ҡулланырға тейеш. Шулай уҡ сауҙа күләмен арттырыу, компанияларҙы ҡушыу йәки "йотоу", хеҙмәткәрҙәр менән идара итеү, хеҙмәтләндереү сифатын күтәреү, етәксе сифаттарын үҫтереү һ.б. тураһындағы мәғлүмәт өсөн эшлекле даирәләр ҡиммәт хаҡ түләргә әҙер.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 25 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Взрослые дочери". Мелодраматический сериал. 1-я и 2-я серии (16+).
23.25 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Тихий дом" на Каннском кинофестивале (16+).
01.45 "Время покажет" (16+).
02.35 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.15 "Утро России".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Загадка судьбы". Ток-шоу.
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Между нами, девочками". 1-3-я серии. Комедийный сериал (12+).
23.50 "Шифры нашего тела. Печень" (12+).
00.50 "Большой африканский разлом"(12+).
01.50 "Я ему верю" (16+).
02.50 "Закон и порядок-20" (16+).
03.50 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
19.00 "Байыҡ-2015". 1 тур (12+)
21.00 "Ҡурай ынйылары". Музыкаль проект (12+)
22.00 "Кис ултырып". "Сәләм, студент".Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 Новости недели.**
**12.00 "Специальный репортаж".**
**12.15 "Весело живем" (12+).**
**12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.15 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.45 "Юные виртуозы Уфы" (0+).**
**16.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**16.45 "КЛИО" (0+).**
**17.30 Новости культуры (0+).**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**18.30 "Черные волки". Сериал (16+).**
**19.30 Новости спорта.**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Народы Башкортостана" (12+).**
**21.00 "Дознание" с Ильдаром Исангуловым (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Этот неловкий момент" (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 26 МАЯ
## ВТОРНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Взрослые дочери". Сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Взрослые дочери". 3-4-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Структура момента" (16+).
01.25 "Наедине со всеми" (16+).
02.20 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Время покажет" (16+).
03.15 "Модный приговор" (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Загадка судьбы" (12+).
17.00 "Вести".
